Халидә Миһрани

# Ынйы сәскә



Ерейментау
қаласындағы
ұзақ кітапханасының
басқарушы Ерғожаға
зор ықыласпен сәлем,
үлкен тілек
автордан.
05.07. 2012 ж.
[illegible]

*Халидиә Миһрани*

# Ынйыы сәскә

- *шиғырҙар*
- *поэма*
- *нәҫерҙәр*



Күмертау–2012

ББК-84 (2 Рос–Баш)
М 57

Был китапты баҫтырып сығарыуҙа матди ярҙам күрһәткәндәре өсөн, шәхси эшҡыуарҙар: Өфө ҡалаһынан Сәғит Мәүриҡ улы Нәҙершинға, «Башэкспрессаправка» сервис компанияһы етәкселәре Руслан Әләт улы Хәкимов менән Данир Ирек улы Бикбулатовҡа, шулай уҡ Күмертау ҡалаһынан «Пионер» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Әнүәр Радик улы Хисмәтуллинға оло рәхмәтемде белдерәм.

**Автор.**

Х. Миһрани.

Ынйы сәскә. –Күмертау ҡала типографияһы, 2012 – 160 бит.

Шағирәнең был йыйынтығына төрлө йылдарҙа яҙылған шиғырҙары, йырҙары, мәсәлдәре, поэмаһы, нәсерҙәре тупланған, шулай уҡ уның рус теленә тәржемә ителгән әҫәрҙәре лә урын алған.

ISBN 978-5-901834-63-3

© Х. Миһрани (Х. З. Алтынбаева), 2012



*Иҙеп-тапап ташланһа ла хатта,*
*Тамырҙары тағы юл ала,*
*Май тыуыуға йәнә баш күтәрә,*
*Ынйыҡкейҙән яҡты нур ҡала.*





## *Автор тураһында*

Халидә Миһрани (Хәлидә Зариф ҡыҙы Алтынбаева) Көйөргәҙе районының Бәләкәй Муса ауылында 1957 йылда донъяға килә. Башланғыс мәктәпте тыуған ауылында тамамлағас, күрше Яңы Муса һигеҙ йыллыҡ мәктәбен бөтөрә. Салауат педучилищеһында уҡый. 1975-80 йылдарҙа Стәрлетамаҡ пединститутының башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультетында белем ала. Район мәктәптәрендә – уҡытыусы, Күмертау ҡалаһында тәрбиәсе булып эшләй. «Көйөргәҙе», «Замана», «Юшатыр» район-ҡала гәзиттәрендә тәржемәсе, хәбәрсе була. 2000 йылдар башында Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә мөхәррир вазифаһын башҡара.

Шиғырҙары йәштән үк республика матбуғатында баҫыла килә, радио, телевидение аша яңғырай. Күмертау баҫмаханаһында нәшер ителгән «Һиндә ҡалам, көнә ҡалам», «Еремә - йырым», «Берҙәмлек», «Дуҫлыҡ йыры» йыйынтыҡтарында донъя күрә. 2007 йылда «Йыһан бүләге» исемле тәүге айырым китабы үҙнәшер ысулы менән баҫылып сыға. 2009 йылда Бәләбәй ҡалаһында үткән «Илһам шишмәләре» шиғриәт фестивале дипломанты була. «Йәйғор» поэтик альманахында шиғырҙары урын ала. Күптәре рус теленә лә тәржемә ителгән. Өс бала әсәһе, ейән-ейәнсәрҙәрен үҫтерә, әлеге ваҡытта хаҡлы ялда.

***

Һеҙҙең ғүмер юлығыҙ тәрән ихтирамға, оло хөрмәткә лайыҡ. Бөтә тормошоғоҙ, ижади һәм һөнәри эшмәкәрлегегеҙ ысын илһөйәрлек, тыуған яғығыҙға мөхәббәт һәм тоғролоҡ, гражданлыҡ бурысына бирелгәнлектең сағыу өлгөһө булып тора.

Тос фекерле журналист, төрлө яҡлы, ҡабатланмаҫ шәхес, һәләтле шағир, яуаплы һәм зыялы кеше булараҡ, Һеҙ коллегаларығыҙҙың, гәзит уҡыусыларҙың, яҡташтарығыҙҙың лайыҡлы хөрмәтен ҡаҙандығыҙ, Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районының әҙәби даирәһендә, шиғыр һөйөүселәр араһында киң билдәлелек яуланығыҙ.

Баҫалҡылыҡ, әҙәплелек, күңел йомартлығы, изге йөрәклелек, эске бер йылылыҡ, тормош тәжрибәһе һәм эшһөйәрлек – бына Һеҙҙең ысын кешелек сифаттарығыҙ, тирә-яҡтағылар Һеҙҙе ана шуның өсөн юғары баһалай ҙа инде.

Тағы ла оҙаҡ йылдар әлегеләй асыҡ күңелле, яҡымлы, һөйкөмлө булып ҡалығыҙ. Һеҙҙе бер ҡасан да ижад ялҡыны һәм илһам ташламаһын ине.

Ә. Й. Ҡотлоәхмәтов,
Көйөргәҙе районының хакимиәт башлығы.



## Ғөсөл

Ҡулдан килһә әгәр, мин, һыуғояр,
Ғөсөл ҡойондороп донъяны,
Гонаһтарын йыуып төшөрөр ҙә
Тормош башлар инем өр-яңы.

Ер аҫтында түгел, ер өҫтөндә –
Ожмах һиңә, Әҙәм балаһы.
Тик тамуҡҡа уны әйләндермә –
Ул балаңа һинең ҡалаһы.

Гөл-баҡсалай ғына еребеҙҙә
Һин бит үҙең — һөйөү емеше.
Ҡарәк түгел клон һис ниндәй ҙә,
Бөйөк һинең һәр бер өлөшөң.

Һуңһә күңел, иртәләрең — энер,
Йөҙөң нурлы булһа, төн сыуаҡ.
Нурландырың, әйҙә, тирә-яҡты
Йәшә, Кешем, сикһеҙ мең быуат!

## Шәфәҡ

Ҡояш байышына сат бағырға
Өүәҫләнмәм ошо арала
Шәфәҡ ялҡынынан офоҡтағы
Йәнлә алһыу һағыш ярала.

Күҙҙе асып йомған бер мизгелдә
Һуңғы нурҙар ирей юғала.
Һыҙландыра, үтеп електәргә,
Бәхилләшеү фани донъяла.

Кеше ғүмере — Ҡояштың бер көнө,
Иртән сығып, кисен байыған.
Кем ҡояшы тора һәр сәк көлөп,
Берәүҙекен болот ҡайыған.

Бар(ы)һы үтә, бар(ы)һы бөтә, һүнә:
Йәшлек, ғүмер, хатта мөхәббәт.
Тик барыбер Ерҙә йәшәү үҙе
Ҡояш кеүек бөйөк, мөһабәт.

## Баҡсам

Алыҫтарҙан йөрөп, урап ҡайтһам,
Үгәйһеп тә көткән гөл-баҡсам.
Алмағасым туңған, сейәм һынған,
Ҡурай еләктәрен сүп баҫҡан.



Көймә, йәнем, – түҙәтерлек хәлем:
Шиңмәгән дә күңел гөлдәрем,
Тамырҙары һис тә ҡоромаған -
Рухташтарым ҡалған, моң ҡалған.

Ижад баҡсам гөрләп сәскә ата,
Емеш бирә һутлы хистәрем.
Ҡасып китһәң дә һин, сәсеп кит, ти –
Шытып сыға барыбер сәскәнем.

Бар байлығым — күңелем баҡсаһын
Вайымһыҙлыҡ ҡыйы баҫмаһын.
Гөлдәремә һыуҙар һибә-һибә
Урам әле ғүмер яҫмаһын.

## Ерем байлығы

Аяҡ аҫты тулы көмөш тәңкә,
Шатлыҡ тула шуға һәр йәнгә.
Ерем байлығы бит ҡар-бурандар –
Аплыҡ менән тулыр буралар.

Яу, яу, әйҙә, аҡ ҡар, өйөрөлөп,
Тау-тау итеп уңыр өйөлөп.
Беҙ йәшәгән донья ап-аҡтыр,
Беҙҙекенән байыраҡ ер юҡтыр!

## Үҙе белә халыҡ

*«Алтынды нәжескә буяу менән, заты китмәҫ»*
*(Аҡмулла)*

Үҙе белә халыҡ: ҡайҙа гүзәл хаҡлыҡ,
Ҡайҙа хурлыҡ, ҡайҙа мутлыҡ, ҡайҙа аҡлыҡ.
Үтһәләр ҙә йылдар хатта ҡырҡлап-ҡырҡлап,
Ҡырын эш барыбер сыға өҫкә ҡалҡып.

Ососоно уҫал заттан түрә-ҡара,
Изге йәндәр баҫылмышыл ситтә ҡала;
Иҫән саҡта белмәйенсә ҡәҙерҙәрен,
Гөлгә күмгән булабыҙ әй ҡәберҙәрен.

Әҙәпһеҙҙәр, һәләтһеҙҙәр, оятһыҙҙар,
Ҡомһоҙ, көнсөл, хөсөт әҙәм, хаяһыҙҙар
Аңламай ҙа, аңғармай ҙа үҙ гонаһын,
Белмәй инде бер саҡ тамуҡта янаһын.

Табыналар, алла итеп, тик аҡсаға;
Ярлы булһа, белмәй-күрмәй туғанын да.
Ҡарап торһаң, торғаны бер фәрештәләр,
Аңлап алһаң, бер кем түгел - фәхишәләр.

Халыҡ һиҙә, халыҡ белә, халыҡ күрә;
Һуң булһа ла, бер саҡ барыбер баһа бирә.
Ғәзиз ғүмерҙәр үтәләр, эй, заяға –
Үтер ине халыҡ өсөн тик файҙаға...



***

Һиңә еңел: һин — изге йән,
Ҡалғандарға нишләргә?
Көрәшеүҙән тайҙым хәлдән
Әүерелмәҫкә иблискә.

Әллә һин бар йөрәгемдә
Әйләндермәҫкә ташҡа,
Өҙөлөп төшкән япраҡ кеүек,
Һәр кемдән тапалмаҫҡа.

Ялағайҙар һәм көнсөлдәр
Хужа бар тирә-йүнгә.
Мин арыным: был донъяла
Тынысылыҡ юҡ бер йәнгә.

Һиңә еңел: һин — изге йән,
Ә мин, әйтсе, нишләйем?
Уртаҡ яҙмыштарыбыҙҙы
Арҡан кеүек ишәйем.

Ҡанһыраған йөрәгемдә
Һиңә һис тә тарһынмам.
Күккә йәнем күтәрелгәс,
Ҡотолормон бар(ы)һынан.

## Һәйкәл

*«Я памятник себе воздвиг нерукотворный…»*
А.С. Пушкин.

Шиғыр һығып сығарырға
Йөрәгемдең хәле юҡ.
Фекер сыймаҡлап ҡуйырға
Форсаты юҡ, мәле юҡ.

Ниндәй тормош һуң әле был:
Этеш, төртөш, йүгереш.
Кемуҙарҙан аҡса эшләү,
Өлгөрөш йә тәгәрәш.

Бер минутҡа туҡтап тороп,
Уйланып алайыҡсы.
Донъя артынан ҡыуам тип,
Отолоп ҡалмайыҡсы.

Үҙең менән алалмайһың –
Барыһы тороп ҡала.
Донъя малы – байлыҡ түгел,
Күңел паклығын уйла.

Ике сажин ер етәлер
Гүр ҡуйынына ятырға.
Нинә ҡыҫҡа ғүмереңдә
Иблискә йән һатырға?

Ниндәй һәйкәл ҡуйҙың икән,
Ҡалһын тип үҙеңдән һуң:
Өйөң бармы, балаң бармы,
Ағас үҫтерҙеңме һуң?

Миңә һәйкәл – шиғырҙарым,
Итәғәтле өс ҡыҙым.
… Камиллыҡҡа ынтылам тип,
Йөрәк майымды һыҙҙым…



## Ябай шағирә

Ярай, һиненсә булһын: мин — яп-ябай бер шағирә,
Иңде ни хәл итәһең, түгелмен шул ҡатын-түрә.
Ынтылмайым түрәлеккә, түгелмен аҡса ҡоло,
Шағирәлек — минең өсөн бәхет бит ул иң оло.
Бәлки, тормош тәгәрмәсем абына ла һөрөнә
Баралыр ҡара ерҙән шағыр-шоғор, кәлтер-көлтөр,
Әммә рухым — осар ҡош, һөйә иркенлекте генә,
Ҡанаттарым — илһам, йәшәү мөхитем —
зәңгәр күктер.

Мин бераүгә лә баш түгел, үҙем лә баш эймәйем,
Шөкөр итәм хәләленә, харам ризыҡ еймәйем.
Бар шөғөлөм — шиғыр яҙыу, мин башҡаны
белмәйем,

Шағирәлегемде йыһан бүләгенә тиңләйем.

## Яралы ҡош

«Рожденные ползать летать не могут».
М. Горький.

Күктә түгел, ерҙә. Эх, ерҙә шул…
Ҡанһыраған, ана, батыр ҡош.
Ҡанаттарын елпеп ала ла ул,
Тик барыһы юҡҡа, бар(ы)һы буш.
Күҙкәйҙәрен бар(ы)бер мөлдөрөтмәй,
Ғорур бағып ҡарай донъяға.
Осоп китермен тип, өмөт өҙмәй,
Тыуып үҫкән яҡҡа – ояға.
Ҡанаттары, бәлки, уңалыр ҙа,
Төҙәлерме йөрәк яраһы?

Йәнгеләһе әле булған саҡта,
Көрәшерлек хәле ярайһы.
Зәңгәр күкте иңләп осор бер саҡ,
Һоҡланырҙар ерҙә шыуығандар.
(Алмайҙар бит болоттарҙы ҡоса
Шыуыр өсөн генә тыуғандар).
Ауыҙ ҡыйшатма һин, түбәндәге!
Яралы ҡош – түгел имгәк һис!
Бахыр, тиеп уны йәлләмәгеҙ –
Ер ҡорттары ғына ерәнгес.
Яралы ҡош – бар(ы)бер ҡанатлы йән,
Уйҙа күктә гиҙеү – шөғөлө.
Нисек кенә түбәнһетһәләр ҙә,
Күктәгесә ҡала фиғеле!
Күктәгесә ҡала фиғеле!!!

## Ташландыҡ эт

Кескәй генә ташландыҡ эт,
Мөлдөрәтеп күҙҙәрен,
Үткән һәр берәүгә ҡарай,
Танығандай үҙҙәрен.
Иғтибар итмәй бер әҙәм,
Һәр кемдең бит үҙ юлы,
Үҙ тормошо, үҙ булмышы –
Эт ҡайғыһы юҡ әле.
Изге рамаҙан айы ла, –
Йәлләмәй йылы һүҙем,
Өндәшкәйнем бисараға,
Ҡыуанып китте үҙе.
Мәхлүк артымдан эйәргәс,
Өйгә үк алып керҙем,
Йылындырҙым, йыуындырҙым,
Ашарына ла бирҙем.
Ҡарап ултырам уйланып,
Был бит эт кенә тиеп.



Кеше булһа, туйып алғас,
«Өрөр», «тешләр» ҙә ине.
Кеше булһа, ҡурҡыр инем –
Шундай бәндәләр була:
Изгелегеңде онотоп,
Эт хәленә ҡалдыра…
…Миңә тоғро дуҫ булыр ул,
Серләшергә бер иптәш.
Йән эйәләре яҙмышы
Ҡайһылай икән сиктәш!

## Ә бер көндө…

Тәбиғәттең мөғжизәле мәле:
Йәшел япраҡтарға ҡар яуа.
Ап-аҡ ҡыш еткәндә һис эше юҡ –
Ағастар бит һаман йәш ҡала.

Быйылғы көҙ әллә ниндәй булды:
Һарғайманы оҙаҡ япраҡтар.
Ә бер көндө ҡапыл алтынланды
Тәҙрә ҡаршыһында ағастар.

Тәбиғәттең иҫ китмәле мәле
(Ғәжәпһенеп бағам донъяға!)
Һары, ҡыҙыл, көрән араһында
Йәшел төҫтәр һаман һаҡланған.

Һарғайып та өлгөрмәгән көйө
Ҡышҡа инде йәшел япраҡтар.
Ә бер көндө осоп төштөләр ҙә
Һалҡын ҡар аҫтына яттылар…

## Сәңгелдәк



Әйәм дә һуң сәңгелдәк, әй, әйәм!
Әйә-әйә, түбәм күккә тейә.
Үҙ-үҙемде юғарыға сөйәм;
Гүйә, күңел сихри көскә эйә.

Осоп китке килә шул саҡтарҙа
Ожмахтай ҙа гонаһһыҙ яҡтарға.
Күктә лә тороп ҡалып булмай шул,
Ергә лә кире ҡайтмай булмай шул...

Сәңгелдәгем ҡапыл аҫҡа төшә,
Йөрәккенәм туҡтап, аһ, бөрешә.
Кемуҙарҙан елдәр, әй, тә этәшә –
Ә мин йәшәү өсөн гел көрәшәм.

Аҫҡа осһам да мин, түгел күпкә,
Күтәреләм тағы зәңгәр күккә.
Беләм, бер саҡ туҡтар ул сәңгелдәк –
Фани донъя түгел бит мәңгелек.

Әйәм дә һуң, әйәм, әй, сәңгелдәк,
Елбер-елбер килә ап-аҡ күлдәк...

## Алмағастар сәскә ҡоялар

Әйтерһең дә, ап-аҡ ҡарҙар яуа:
Алмағастар сәскә ҡоялар.
Матур саҡтар үтте инде тиеп,
Гүйә, ауыр һулап ҡуялар.

Матурлыҡ – ул тик бер көнләк кенә,
Иң мөһиме – емеш-алмалар.
Шуның өсөн ерҙә тамыр йәйҙең –
Быны тормош үҙе баһалар.



Көмөш сәскәйҙәрең ҡойолһа ни,
Алма кеүек, ана, балалар.
Ғүмер үтһә лә бит, һинән һуң да
Ерҙә алтын тамыр тарала.

## Ынйыы сәскә

Ынйыы сәскә үсә күләгәлә,
Мөрхәтһенмәй әҫе ҡояшты.
Әйелешкән ап-аҡ саф таждары
Оялсан ҡыҙ менән оҡшашты.

Гүйә, нәзәкәтле Яҙһылыуҙың
Мәрйендәре ҡалған ҡойолоп.
Ҡара урман яҡтырғандай кеүек,
Ап-аҡ нур эсендә ҡойоноп.

Ҡалһа ла ул һәр саҡ күләгәлә,
Барыһы ла күрә, һоҡлана.
Өҙөп-йолҡоп бөтөрәләр инде –
Ҡәзерен белеүселәр юҡһана...

Иҙеп-тапап ташланһа ла хатта,
Тамырҙары тағы юл ала.
Май тыуыуға йәнә баш күтәрә,
Ынйыҡайҙан яҡты нур ҡала.



## Тирәктәр мамыҡ осора

Гүйә, ап-аҡ ҡарҙар яуа –
Тирәктәр мамыҡ осора.
Тәбиғәттә күсәгилешлек –
Йәйҙең башланған осоро.

Мамыҡ алҡаһын тирәктең
Елдәр йәлләмәй туҙғыта.
Ошо мәлдәр әллә нисә
Зиһендә уйҙар ҡуҙғыта...

Күпме ҡыҫыр хыялдарым
Мамыҡтай елгә осалар.
Асманға аша алмайса,
Шым ғына ерҙе ҡосалар.

...Ботаҡтарын да мөнтәйҙәр,
Һаман бирешмәй тирәк.
Мамыҡтар осор инде ул.
Тирәктәй ныҡлыҡ кәрәк.

## Ҡара болот – аҡ болот

Ҡара болот баҫты киң офоҡто,
Ябырылып килә, ашығып.
Гүйә, имәнес бер януар инде –
Кем өлгөрә, әйҙә, ҡасығыҙ!

Быша-быша дауыл сығыр төҫлә,
Ҡойон уйнар төҫлә ҡоторол.
Барлыҡ донъя дөм-ҡараңғы булды,
Ҡалды йән эйәләре бойоғоп...



Әммә... һоро төҫтәр шыйығая,
Аҡһыллана бара күк йөҙө.
Яу-болоттоң әҫәре лә юҡсы,
Һауала тик ап-аҡ быу йөҙә.

Эреп юҡҡа сыҡты ҡара болот,
Елдәр уны ҡыуып таратты.
Күк күкрәмәй, йәшен яҫтламай –
Тыныс халәтенә ер ҡайтты.
Тыныс халәтемә мин ҡайттым.

## Йондоҙҙар

Үҙен йондоҙ тип һанаған
Яҡтыла ялтыраһа ла,
Ысын йондоҙ ҡараңғыла
Саң бөртөгөнән яһала.

Бер ни ҙә мәңгелек түгел
Йәһәннәмле был донъяла,
Хатта ни-ниң сағыу есем
Бер ваҡыт һүнеп юғала.

Йондоҙҙарға тиңләшмәйсә,
Булсы нурлы ла, ябай ҙа.
Йән эйәһен йәнәшәңдә
Белсе ҙурлай ҙа, аңлай ҙа.

## О Богема!

Ауыл һайын йөрөй Аҡмуллабыҙ,
Арбаһына тейәп китаптарын.
Аптыраған көндән Рәми ағай
Мәмерйәлә яҙа хитаптарын.

О Богема! Нимә үҙгәрҙе һуң?
Һин әле лә шулар хәлендәһең,
Бал да май эсендә йөҙөү ҡайҙа –
Хаҡ һүҙ өсөн ситкә тибеләһең.

«Рәссам ас булырға тейеш» икән –
Рухи аҙыҡ ауыҙ итәһегеҙ,
Ижад емештәрен тәрә-тирә,
Был донъянан иртә китәһегеҙ.

Таҙарынһын өсөн бысраҡ донъя,
Юғары Көс һеҙҙе ебәргәндер.
Ығы-зығы* ипкә килһен өсөн,
Мәңге йәшәй һеҙҙең йәндәрегеҙ.

## Ҡояшҡа юл

Хәтһеҙ генә, күҙ ҙә йоммай,
Ҡояшҡа текләп торҙом.
Тора торғас, утлы шарға
Илаһ бер күпер ҡорҙо.

* Ығы-зығы - хаос.



Ебәктәй туҡылған һуҡмаҡ
Тоташтырҙы беҙҙәрҙе:
Минән – уға, унан миңә
Йылы нурҙар теҙелде.

Ошо халәт ғүмер буйы
Юҡ-барға түгелмәһә,
Йәнемә тыныслыҡ килер,
Нурлы юл өҙөлмәһә.

## Ҡарлуғасҡай – ирекле ҡош

Ҡарлуғасҡай, тәҙрәм ҡаршыһынан
Ҡыялатып мең ҡат уҙаһың.
Һауа ярып елеп осҡаныңа
Көн дә ҡарап күҙем ҡыҙалыр.

Ирекле ҡош, тағы ҡайттың илгә –
Ҡай яҡтарҙа булдың, әйт әле.
Нindәй ерҙәр, ниндәй хәлдәр күрҙең –
Миңә лә бер, әйҙә, һөйләле.

Алһаң ине мине үҙең менән –
Ҡитғаларҙы иңләп гиҙермен.
Сырҡ-сырҡ осҡан ҡарлуғасҡай кеүек,
Ниңә мин дә азат түгелмен?



## Яҙғы йыуаныу

Ҡояш балҡый, ләйсән яуа –
Әй, игендәр шытыр!
Ҡоштар һайрай, һыуҙар аға –
Йә, Хоҙайға шөкөр!

Күҙ күрә, ҡолаҡ ишетә,
Аяҡ-ҡулым иҫән –
Ошоларҙың һәммәһенә
Шөкөранә итәм.

Гонаһтыр ул – зар-интизар,
Мыжымасы, төкөр!
Күрһәткәнеңә яҡты көн
Ит Хоҙайға шөкөр!

## Үкенестәр

Төндә тыуған күпме шиғырҙар бит
Яҙылмайса ҡала ҡағыҙға.
Аҡҡа төшмәгәндәр иҫкә төшмәй,
Хәтерләргә тырышһағыҙ ҙа.

Күңелдәргә килгән күпме моңдар
Һалынмайса ҡала нотаға.
Йырланмағас, иҫтән сыға инде,
Дусар ителә лә оң(о)тоуға.

Хыялдарҙа күргән күпме һүрәт
Рәсем булалмайса юйыла.
Төҫтәр һүнә, һыҙҙар иреп аға,
Ашырмағас уйҙы бойомға.

Ниәтләгән күпме ғәмәлдәрем
Үкенес булып, йәнде кимерҙе.
Һәр нәмәнең үҙ мөҙҙәте бар шул –
Ҡыҙыуында һуҡ һин тимерҙе,
Әрәм итмәйенсә ғүмерҙе.





## Һинд йырҙары

Һинд йырҙары Һималайҙай бөйөк,
Ганг кеүек киң һәм тәрәндәр.
Иҫ киткес моң! Хайран ҡалдырырлыҡ –
Башҡорт йырҙарына бәрәбәр.

Һиндтар ҙа бит, тыңлап торһаң әгәр,
«Мөхәббәт» тип йырлай беҙҙеңсә.
Хистәребеҙ, уйҙарыбыҙ уртаҡ,
Көн итһә лә һәүем үҙенсә.

Башҡорт һымаҡ ул да гел йырлаған,
Бер илде лә баҫып алмаған.
Әҙәм ғәләйҳиссәләмдән таралған
Барса халыҡ ерҙә бер туған!

Ер йөҙөндә ике халыҡ моңло:
Береһе уның – башҡорт, йәнә индус,
Моңдарыбыҙ хатта ки ауаздаш –
Йәшәһәң дә алыҫ, яҡын һин, дуҫ!

## Һәйкәл янында

Һәйкәл. Тынлыҡ. Тик бер әсә генә,
Сәскә тотоп сибек ҡулына,
Сал сәскәйен йыйып яулығына,
Һағынып килгән ғәзиз улына.

Һалды ла ул ҡуҙҙай сәскәләрҙе
Һалдат һәйкәленең тобөнә
Тып-тын ғына ҡарап тора бирҙе,
Һағыш сыҡты уйсан йөҙөнә.

«Һуғышҡа мең ләғнәт!» –
тигән һымаҡ

Ошо күҙ ҡарашы әсәнең
Ҡабат хәтеренә төштө уның
Ут эсендә сағы иленең.

Әйтә кеүек улы, быны күреп:
«Тынысланһаң, әсәй, иламa.
Беҙҙең кеүек ир-егеттәр барҙа,
Аяҡ баҫмаҫ дошман илемә!»

1970 йыл.

## Ҡарағайҙар

*(Һуғышҡа 60–лап яугир ебәргән Кинйәбыҙ ауылы халҡы Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығына 60 ҡарағай ултыртты)*

Әйтерһең дә, бөгөн алтмыш яугир
Халыҡ хәтерендә терелде:
Һомғол ҡарағайҙай ир-егеттәр
Тыуған яҡҡа ҡайтып теҙелде.

Ҡарағайҙар йәшәй күп быуаттар,
Ҡарағайҙар ныҡлы, сыҙамлы.
Батырҙарын алды мәңгелеккә
Тыуған ерҙең изге ыҙаны.

Юҡ, батырҙар һис тә үлмәгәндәр –
Ҡарағайҙар булып үсәләр.
Исемдәре халыҡ хәтерендә
Юйылмаслыҡ булып күсәләр.



## Әсә ораны

*2004 йылдың 1 сентябрендәге Беслан фажиғәһенән һуң*

Белем орлоҡтары сәскән йортта
Тик изгелек тейеш булырға -
Шартлау тауыштары ишетелде
Ҡыңғырауҙар яңғырар урынға.

Ни йөрәгең етеп аттың, вәхши,
Нисек күтәрелде ҡулдарың?
Эҙһеҙ үтер мәллә һинең өсөн
Бер гонаһһыҙ сабый ҡандары.

Ҡот осҡос ҡылыҡты аңлатырға
Етмәҫ төҫлө нәфрәт һүҙҙәре.
«Ҡотҡарығыҙ беҙҙе!» – тигән кеүек
Бер гонаһһыҙ сабый күҙҙәре.

Ер шары бит үҙе ҙур бер мәктәп,
Өйрәтә ул бик күп ғилемгә.
Оят беҙгә, оят балаларҙы
Ҡурала тә биреү үлемгә!

Эй донъяның барлыҡ кешеләре,
Ни ҡылына Ерҙең йөҙөндә?!
Шуны күрә, белә тороп, бер ни
Эшләп булмаймы ни бөгөндән?

Ер шарының барлыҡ әсәләре,
Була һеҙгә күпме түҙергә?!
Балаларҙы түгел, ят золомдо
Кәрәк мәңгелеккә күмергә!

Эй донъяның барлыҡ ир заттары,
Туҡтатығыҙ бындай махшәрҙе!
Әсә булып, бөгөн сал һуғамын:
Балалар бит тыуған йәшәргә!

Балаларҙың баш осонда һәр саҡ
Ҡояш ҡына торһон йылмайып.
Шат тауыштар ғына ишетелеп,
Гөрләп торһон мәктәп йыл һайын.

## Чечня бәйете

Ир-егеттәр китә Чечняларға,
Ил саҡырғас, китмәй нишләһен.
Һөлөк кеүектәре башын һала,
Әсәләрҙең кипмәй күҙ йәше.

Чечня тигәндәре бигерәк алыҫ,
Хәсрәттәре генә яҡында.
Башҡорт тигән ирҙәң аҫылдары
Ятып ҡалды Ҡафтау артында...

Ғорурлыҡҡа кемдәр һыҡланмаҫ та,
Иркенлекте кемдәр яратмаҫ.



Әсәм, балам, Тыуған илем тиеп,
Үҙ ерҙәрен кем дә талатмаҫ.

Ерҙәре бит ҡалай гөл-баҡсалай!
Ҡара гүрҙәй итеп кем талай?
Ана шундай нәфрәт менән ҡарай
Ҡара күҙле үҫмер бер малай.

Ожмах кеүек ерҙе мәсхәрәләп,
Тапап йөрөү кемгә килешә?
Ҡан-ҡәрҙәшлек ебен өҙөп-йолҡоп,
Кем нимәгә икән ирешә?..

Киткәндәрҙе көтөп, күҙҙәр тала,
Йөрәк иткәйенә ҡан һауа.
Туҡтатырға ине был махшәрҙе,
Табырға ла ине бер дауа.

## Килер көн

Башҡортостан – сал Уралдың
Һулҡылдаған йөрәге.
Башҡортостан – бар халҡымдың
Баш терәгән төйәге.
Буталды бар халыҡ бергә,
Ҡалманы бер саф ырыу.
Уралыма кем тын өрөр,
Кем килтерер тере һыу?
Ике башлы сәмрегошто,
Ай, ауыр шул еңеүе.

Ашҡаҙарҡай һыуы ла бигерәк һалҡын,
Йөрәгемдә яна ут-ялҡын.
Үҙ теләккәйе менән ир ташлап китмәҫ
Тыуған төйәккәйен, үҙ халҡын.



## Ҡиҫәтеү

Ҡыҙыл яҡут муйынсаһы муйылдың,
Алтынланды еләне лә ҡайындың,
Йәшел камзулын ташламай шыршыҡай –
Һәр ҡайһыһы үҙенсә, һай, ҡупшыҡай!

Көҙгө тәбиғәт биҙәнде байрамса:
Кейенделәр, яһандылар барынса;
Киләнделәр ҡышҡа керер алдынан,
Үкенмәҫлек булһын, типтер, һуңынан.

Бер төҫләләр ҡыш еткәстен бар(ы)һы ла:
Ап-аҡ кәфенлек буранда урана...
Ә яҙҙарын аҡ япманы ырғытып,
Яңы тормош башлай, башын ҡалҡытып.

Кешеләрҙең яҙы, көҙө бер килә–
Үтеп киткәс, кире ҡайтмай һис кенә.



Матур йәшәйексе шуға гел генә,
Әҙәм ғүмере булалыр тик бер генә.

Япраҡта, сепрәктә эш тормай –
Күңел күркен һаҡлайыҡсы һис боҙмай,
Һин бит тәбиғәттең гүзәл емеше,
Үҙ-үҙеңде йәмһеҙләмә, эй кеше!

Көҙгө сыуаҡ көндә шулай уйландым,
Ҡарап тороп тәҙ(е)рәнән урамды...

## Тәлмәрйен
(мәҫәл)

Һаҙлыҡтағы бер баҡылдаҡ тәлмәрйен
Табып алған гәүһәр-яҡуттан мәрйен.
Тағып алған мөһабәт муйынына –
Әҙерләнгән мөхәббәт уйынына.
Шатлығынан үрле-ҡырлы һикерә,
Һаҙлығында үҙ затына төкөрә.
Ҡоро ергә сығып, серек төпһәлә
Баҡылдай маһайып көндөҙ, төндә лә.
Гүйә, назлы аҡҡоштай муйыны бар;
Гүйә, зифа ҡамыштай буй-һыны бар.
Әйтерһең, йырсы ҡоштай тауышы бар;
Әйтерһең, мөхәббәтһеҙ ҡауышыу бар.
Ылыҡтырмай ҡиәфәте бер кемде,
Ялыҡтырҙы ҡыланышы һәр кемде.
Үҙе ямаҡ, үҙе бысраҡ бисура,
Һаҙлығында тик ултырһа ни була?
Ялтыр-йылтыр тағыу менән юҡ баһа,
Булмышы менән барыбер ул – баҡа.

## Түрә
(мәҫәл)

Булып алғайны бер бүре «шәп» түрә,
Батша инде хатта үҙенә күрә.
Ураттылар ошаҡсы, ялағайҙар,
Фәхишәләр, «аҡыллы баш ағайҙар».
Властка ынтылыусылар ҡуралмай,
Үрҙәгеләр үҙ даирәһенә алмай.
Эш тип һиҙгәнде иғтибарға алмай.
Файҙа эҙләүселәр артынан ҡалмай.
Бындай түрәлек оҙаҡҡа барырмы,
Мәңге ҡалырлыҡ данлы юл ярырмы?

## Күгәрсен менән сәпсек
(мәҫәл)

Күгәрсенгә бер мал ризыҡ тап булғайны:
Икмәк киҫәге бармаҡ башындай ғына.
Үрелеп өлгөрмәне алдындағына,
Алып ҡасты ҡеҫҡәй сәпсек йылғыр ғына.
Изге ҡош алан-йолан ҡаранғыланы,
Ғорур ҡалды: бастырманы, һуғышманы.
«Насибы булыр, ник тоҫ бозорға», – тине,
Үсләшеү уның кәсебе түгел ине.
Ситтәр өлөшөнә төшөү сәпсек өсөн
Бер ни тормай, хатта шулай кәрәк төҫлө
Ул ғүмер итә – уға был ғәмәл үтә.
Бер кем бер һүҙ әйтмәй – гүйә, ул иң көслө.
Күп тә үтмәй, ҡыштың селлә бер көнөндә
Туңып ҡатҡан сәпсек ергә ҡолап төштө.



## Дүрт юллыҡтар

Күпме һинән ярҙам алған кешеләр
Үҙеңде бит йығып һуғып киттеләр.
Тәүҙә һине терәк-файҙа иттеләр ҙә
Аҙаҡ, эттәй, шуға бысраҡ һиптеләр.

***

Алдаҡсы, бур, ялағай вә хәйләкәрҙәр,
Әрһеҙләшеп, рәхәтлектә көн күрәләр.
Йыуаш, тәүәл, саф намыҫлы, сабыр иһә
Һаман шулай күләгәлә ҡала килә.

***

Түрәгә ярай белгәнгә – ярты табыш,
Йөк атылай эшләгәнгә – оло ҡуҡыш.
Төшөмдә урын өсөн талаш-тартыш –
Ана шуңдайға әйләнде беҙҙең тормош.

***

Алыпһатарҙарҙы элек хөкөм кеттө,
Ә хәҙер улар иң маҡтаулы – бәтмәр.
Карьеристарҙан элек халыҡ көлдө,
Ә хәҙер улар иң маҡтаулы – өлгәр.

***

Эшҡыуар, бизнесмен, коммерсант –
«Йүнсел»дәрҙең атамаһы ана шулай.
Кешеләрҙе төп башына ултыртмайса
Йәлләй белгәндәрҙән «әҙәм» сыҡмай.

## Ҡышҡы юл

Һин ҡайғырма әле, ҡайғырма –
Ҡышҡы юлдың үтә аҙабы.
Ос-ҡырыйһыҙ хәҙер тойолһа,
Яҙҙар менән бөтә аҙағы.

Ҡышҡы юлдар оҙон, бураnлы,
Ҡайҙа ғына барма – тәрән көрт.
Юл яр, әйҙә, алға тыу атла:
Яҙҙар килер бер көн, килер – көт.

Ҡышҡы юлға сыҡмай булмай шул,
Донъя мәшәҡәте йөрәтә.
Гел туңдырып ҡына тормай ул,
Яҙҙар барыбер килеп иретә.

Ҡышҡы юлың һәр саҡ уң булһын,
Юл күрһәтһен таяҡ-маяҡтар.
Меңләп янған утҡа ынтыл һин,
Талһа талһын, әйҙә, аяҡтар!

## Ил ағаһы

«Ҡайҙа һеҙ, башҡорт егеттәре?» - тип,
Ҡай берәүҙәр юҡҡа сан ҡаға.
Ысын башҡорт уҙамандары ла
Барҙар әле беҙҙең арала.

Һин дә шулай ил ағаһы беҙҙең,
Изге эштәр менән батырһың.
Олпатлығың үҙе бер күркәмлек,
Изге уйҙар менән матурһың.



«Бер башҡортто бирмәм рәнйетергә!» -
Тиеп өҫтәл һуҡҡан — һин бит ул.
Башҡорт ауылдары бөтмәһен тип,
Ярҙам ҡулы һуҙған — һин бит ул.

Милләт, милләт, тиеп йән атаһың,
Күп йәштәргә хәс тә атайһың.
Эшләтә лә, эшләй ҙә һин белдең,
Һиндәй ирҙәр нишләп ҡартайһын?

Һинең кеүектәр бит ил тотҡаһы,
Һиндәй була ирҙең аҫылы.
Элеккесә ҡал һин арыҫландай,
Маяҡтай ян, һүнмә, баҫылма!

## Яңы йыл теләктәре

Ҡулға бәхет ҡошон тотоп,
Яңы йыл ела беҙгә.
Тыныс тормош вәғәҙә итеп,
Нур сәсеп килә ергә.
Өмөтөбөҙ һүнмәй беҙҙең:
Донъялар матур булыр.
Балаларҙың бәхетен күреп,
Күңелгә шатлыҡ тулыр.
Икмәк тә бар өҫтәлдәрҙә.
Һуғыш уты тоҡанмаҫ.
Туған телем иҫән әле –
Халҡым һис тә тарҡалмаҫ.

Ҙур ышаныс бағлап, алға
Халыҡ күҙен төбәгән.
Киләсәктә лайыҡ тормош
Ҡороу уның теләге.
Күп әҙәмдәр болһалар ҙа,
Халҡым әле үлмәгән.
Боғаҙынан алһалар ҙа,
Илен һис тә бирмәгән.
Динен, телен һаҡлап ҡалған,
Намыҫын да юймаған.
Сит ерҙәрҙе таламаған,
Үҙе иреккә туймаған.
Ирек өсөн ҡойған ҡаны,
Һатмаған ирлек даны.
Кешелеген юғалтмаған,
Томалаһа ла аңы.
Хәмер, йәбер, башҡа золом
Аяҡ сала туҡтауһыҙ.
Ғорур ҡал һин, эймә башың,
Йәшә илау-һыҡтауһыҙ.
Шулар минең теләктәрем
Яңы йылда халҡыма.
Башҡа бер ни кәрәк түгел,
Илем генә балҡыһын!





## Көмөш еп

*(Ә. Мулдашевтың китаптарын уҡығас)*

Йәндән башҡа тән нимә ул?
Тиреле һөлдә.
Ит тә май түгел, йән вә рух –
Мөһим бына ниҙәр!
Күктә осалыр йәнебеҙ
Төштә түгел, өндә.
Күҙгә күренмәҫ нескә еп
Бәйләй тәнде, йәнде.
Шул көмөш еп өҙөлмәһә,
Йәшәй кеше мәңге.
Теге донъяға китһә лә,
Үлмәй уның йәне.
Көмөш ебе өҙөлмәйҙәр
Бәхетлене генә.
Унлай ҙур бәхет тәтейҙәр
Һирәктәргә генә.
Бәндә ғүмере берәү түгел,
Ул күп тапҡырҙар тыуа.
Донъялар буйлап гиҙәлер –
Тәңре шулай ҡуша.
Тәне серей, йәне күсә
Башҡа бер тәнгә.
Ул барыбер шул уҡ кеше;
Тимәк, әҙәм мәңге.
Тиреҫ ҡорто булмау өсөн
Килер тормошонда,

Хәҙерҙән үк гонаһ ҡылма:
Байлыҡҡа ынтылма.
Үҙеңде Аллаһ һанама,
Йәки Алиһә –
Шунан да ҙур гонаһ юҡтыр
Ерҙә югиһә.
Йыһан – беҙҙең төп йортобоҙ,
Хатта бөтә Ғаләм.
Саң бөртөгө булһаҡ та беҙ,
Йәнле заттан әле.
Рухыбыҙҙы сафландырһаҡ,
Донъя теүәл булыр.
Йыһан буйлап сәйәхәттә
Юлыбыҙ уңыр.
Барыһы яҙып алына –
Яманы, яҡшыһы.
Яуап көнө килеп еткәс,
Ҡотола алмаҫһың,
Һис ҡасан да өҙөлмәһен
Көмөш ептәребеҙ.
Ерҙә тормоштар һүнмәһен –
Изге өмөтөбөҙ.
Тәңреме ул, Алламы ул –
Оло бер көс булыр.
Яҡты нурын һибеп беҙгә
Ярҙам ҡулын һуҙыр.
Амин!



## Һылыуҡайға

Эй һылыуҡай, һылыуҡай,
Күҙең-башың уйнатып,
Мейеңде аҙ уйлатып,
Йөрөйһөң арт һикертеп,
Ир-ат затын тилертеп –
Шул да булдымы ғәҙәт,
Шул да булдымы әҙәп?
Әҙәмдә булһын һәләт,
Күңеле булһын йәннәт,
Ҡулдары булһын алтын,
Уйлаһын алдын-артын –
Шунда булырһың кеше,
Һоҡландырыр бар эше.
Ғүмер буйы йөрөрһөңмө
Кешенән эш эшләтеп;
Ҡулыңдан бер ни килмәгәс,
Керпегеңде елпетеп?
Һис тә аптырамайһың,
Беллеклегә һанайһың,
Танау сөйөп, тек-тек баҫып,
Ғорурланып атлайһың,
Ләззәтле йылмайған булып,
Түрәләргә ярайһың.
Ғорурланырлыҡ ул хәтлем
Низәр башҡарҙың әле?
Барса халыҡ һоҡланырлыҡ
Ни эштәр ҡылдың әле?
Хан ҡыҙы инде, гүйә:
Түбәһе күккә тейә;

Әйтерһең дә, бөтә донъя
Тик уға башын эйә.
Яңылышаһың, ҡыҙыҡай,
Һин тәптө буш ҡыуыҡҡай –
Беләһең микән шуны,
Һиҙәһең микән шуны?
Әйт тиһәгеҙ, әйтәйем,
Эс серемде һүтәйем.
Шундайҙар донъяны баҫҡас,
Инде ни хәл итәйем?
Эшлеклегә көн бөттө,
Һәләтлегә йүн бөттө,
Тормоштоң йәме китте,
Әҙәптең бәҫе китте.
Оло ағай-апайҙарын
Бар тиеп тә белмәйҙәр.
Баштарына баҫып, иҙеп,
Юғары үрмәләйҙәр.
Тиҙерәк артына тибеп,
Ҡотолоу яғын ҡоралар.
Кәрәк булыр әле, тиеп
Уйлап та һис бирмәйҙәр.
Килер һеҙгә лә ул көн:
Ҡартлыҡ оҙаҡ көттөрмәҫ,
Һеҙҙе лә сүпкә ырғытып,
Әллә рисуай иттермәҫ?
Оят тигән нәмәне
Юғалтып та бөткәндәр.
Намыҫ тигән нәмәнең
Ни икәнен белмәйҙәр.
Ҡулдан килмәме, юҡмы –



Түрәлеккә үрләйҙәр.
Түрә һылыу, һин еңдең,
Эштә «тәхеткә» мендең,
Йылы урын, аҡса, ир-ат
Бәхет икән тип белдең.
Алдаҡ, ошаҡ, ялағайлыҡ
Гонаһ түгелме инде?
Таныш-тонош арҡаһында
Әҙәм булып йөрөйһөң.
Ғаиләң юҡ, балаң юҡ,
Әллә һин бер бәрейһең?
Намыҫ ҡорто кимермәйме
Күңелеңдең бер ситен?
Һиҙеп торам: барыбер һинең
Йөрәгең – ярсыҡ, китек.
Мин түгел һиңә хөкөмдар,
Алла үҙе беләлер,
Әҙәмдәрҙең ҡылғанына
Дөрөҫ баһа бирәлер.
Яуап бирерһең әле бер
Хоҙай Тәғәлә ҡаршында.
Үрле-ҡырлы һикерерһең
Утлы тамуҡ ташында.
Әлегә йөрөй бирәһең
Кешенән эш эшләтеп;
Бер ни ҡулыңдан килмәгәс,
Керпегеңде елпетеп...

## Шып-шым булып ҡалды ихата

Сыр-сыу килеп, ҡарлуғастар йәйҙә
Балаларын оя ташлата.
Ҡарлуғастар китте, етте көҙ ҙә,
Шып-шым булып ҡалды ихата.

Оя ташланылар балаларым,
Шып-шым булып ҡалды ихата.
Күҙгә ямғыр булып һағыштарым
Илата ла һаман илата.

Ағастар ҙа япраҡ ташланылар,
Шып-шым булып ҡалды ихата.
Артыҡ тынлыҡ ауыр икән дә ул,
Йөрәк һыҙлай шуға уғата.
Шып-шым булып ҡалды ихата…

## Кеше һәм тәбиғәт

Кеше – тәбиғәт балаһы түгел,
Йәһәннәмдә тик сан бөртөгө.
Өйөрөлә ул да Ҡош юлында –
Ғаләм үлсәүенең бер йөгө.

Тыуым булғас, үлеме лә була:
Сандан яралғандар – тағы сан,
Хатта Ҡояш бер саҡ һүнер инде,
Ҡабат атмаҫ инде алһыу таң.

Кеше тәбиғәт балаһы икән –
Тәбиғәттә уның бар көсө.



Тирә-яғын былай ҡыра ҡалһа,
Юғалыр бит уның үҙ төҫө.

Башҡа планеталарға күсеп, кеше
Ҡотолормо ахырызамандан?
Еребеҙҙе нисек һаҡлау уйы
Тынғы бирмәй миңә һаман да.

## Мин — мәңгелек

Мәңгелек* тип миңә исем ҡушҡан
Атай мәрхүм, бағлап өмөттәр.
Шул исемгә һыйған ғүмер баҡый
Өлөшөмә төшөр көмөштәр.

Баҡыйлыҡтың сикһеҙ сылбырында
Мин — бер ҡулса, шуға мәңгелек.
Минең ғүмеремә ялғандылар
Сабый ғүмерҙәре иң элек.

Хәҙер бына ҡосағымда ейән –
Минең мәңгелектең дәлиле.
Мин тыуғанмын үҙ ризығым менән,
Ул да Хоҙайҙың бер хәлиле.

Тормош ығы-зығылары сүп ул,
Иң ҡиммәте — Ерҙә йәнлелек.
Сылбыр ҡулсалары өҙөлмәһә,
Донъя матур, донъя мәңгелек!

* Халиҙә — гәрәпсәнән «мәңгелек» тигән һүҙ.

## Әсәйемә

Нисәнсе ҡат күрҙем, әсәкәйем,
Йәш түтеүен яңғыҙ, шым ғына,
Мине күргәс, ҡапыл турайғанын:
«Ҡартлыҡ ҡына, балам,
шул ғына...»

Йәшермәсе, әсәй, һиҙеп торам
Һыҙылғаныңды йөрәк майыңдан.
Яңғыҙ ҡалдым, тимә: ике ҡыҙың –
Ике йондоҙолай айыңдың.

Әсәй, һине ҡыуандырыу өсөн
Ни нәмәләр генә ҡылайыҡ?
Ирең ситтәренә ғүмерлекка
Беҙ һыламайыу булып ҡунайыҡ.

## Атайыма

*Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, «Батырлыҡ өсөн» миҙалына лайыҡ булған атайым Миһранов Зариф Тәҡи улының яҡты иҫтәлегенә*

Нисә тапҡыр Еңеү яҙы килә,
Нисәнсе ҡат алһыу таңдар ата.
Нисәнсе йыл яҙҙар менән бергә
Уйҙарымда тағы атай ҡайта.

Һуғыш эҙе — тимер ярсыҡ һалған
Йәрәхәтең һаман күҙ алдымда.



Әле генә кеүек иҫтә ҡалған
Йөрөгәнем тағып миҙалыңды.

Афәттәрҙән иҫән ҡалғанһың да,
Һин барыбер һуғыш ҡорбаны шул:
Иртә киттең... Ике ҡыҙ ғынаңдың
Үҫкәнен дә көтөп торманың шул.

Йәшәү насип булғанғалыр беҙгә,
Тамуҡтарҙан урап ҡайтҡанһың һин.
Тыныс тормош бүләк иткәс кенә,
Тынысланып үҙең ятҡанһың һин.

Һуғыштан һуң тыуған ике ҡыҙың
Ҡәбереңә килеп башын эйә.
Быуын-быуын тыуыр вариҫтарың
Сал тарихтың хәтер ташын өйә.

## Ҡоштар байрамы

Ошо яҙҙа оҙаҡ ҡарап торҙом
Илгә ҡайтҡан ҡоштар байрамын,
Парлы ҡоштоң бергә һөйөшөүен,
Үҙ мөйөшөн табып һайрауын.

Оло бәхет кескәй ояһыҙҙа!
Ҡошҡайҙарым, күңел елкенә!
Һеҙме икән алла бәхет ҡошо,
Һеҙҙең арттан мәлләә ҡот килә?

... Үҙ оябыҙ ҡороп, күп бәхетте
Тәҡдим иткәс йәнем башларға,
Ҡапыл йөрәккәйем тетрәһә лә,
Йылмайҙым мин, ҡарап ҡоштарға.

## Үпкәләмә

Үпкәләмә,
                    минең йөрәгемдә
Балаларға урын күберәк:
Күҙ нурҙарым күп-төп -
                    ҡыҙҙарыма,
Ҡул көстәрем китһен
                    ҡыҙҙарыма,
Улар үҫеп бер саҡ кеше булһа, –
Һинең өсөн булыр шул бүләк.

Һинһеҙ донъям, йәнем теүәл түгел,
Һинең менән еңел төҫләрәк.
Балаларһыҙ беҙ бит
                    буш йөрәк,
Барыбыҙ ҙа бергә –
                    күш йөрәк.
Шуның өсөн һиңә мөхәббәтем
Йылдар үткән һайын көслөрәк.



## Аманатым

Эй ҡыҙҙарым, ҡыҙҙарым!
Ҡыҙҙарым — сәскәләрем,
Ҡоштарым, бәпкәләрем,
Һөйөүем бүләктәре,
Йөрәгем бүлектәре.
Гөлдән наҙлы Гөлназым,
Гөлдән гүзәл Гүзәлем,
Айҙай нурлы Айгөләм –
Һеҙ минең шиңмәҫ гөләм,
Алтыным да көмөшөм,
Насип булған өлөшөм,
Ожмахтағы емешем.

Эй ҡыҙҙарым, ҡыҙҙарым!
Яҙҙарым, йондоҙҙарым,
Һеҙгә булһын наҙҙарым.
Йөҙөңдә — шатлыҡ алы,
Телеңдә — дуҫлыҡ ҡаны,
Мейеңдә — заман аңы.
Ҡаршыңда — тыныс таңың,
Алдыңда — бәхет тауың.
Ғүмерең — тормош яҙы,
Ә үҙең — сәскә наҙы.

Эй ҡыҙҙарым, ҡыҙҙарым!
Һеҙҙе һөйөп туймамын,
Ғүмерем буйы уйлармын.

Үҫергә лә үҫергә,
Кеше булып етергә.
Уҡып белем алырға,
Эшләп данлы булырға,
Һөйөргә лә көйөргә,
Таянмаҫҡа бөйөргә,
Һыҙғанырға еңеңде,
Нурлатырға иленде.

Эй ҡыҙҙарым, ҡыҙҙарым!
Әсә һүҙе был һеҙгә,
Тыңла — бүләк шул минә.
Олоно оло итһәң,
Кеселе кесе итһәң,
Аманатты үтәһәң,
Яманаттарҙан китһәң,
Дөрөҫ, тура юл үтһәң,
Халҡыңа хеҙмәт итһәң,
Булырһың гөл һәйкәле,
Булырһың ил сәскәһе.
Эй ҡыҙҙарым, ҡыҙҙарым!
Хөрмәтләһәң ереңде,
Рәхмәтләрһең өйөңдө.

## Ҡыҙыма

Ҡана, балам, арҡаңдан бер тупылдатып ҡағайымсы,
Мөлдөрәмә күҙҙәреңә тағы бағып ҡарайымсы.
Китәһең бит, туйғансы бер һине күреп ҡалайымсы,
Йәндәремә, иншаллаһ, шулай тынйслыҡ алайымсы.



Һин бит минең йәшәтәһең был донъяла тартып-һуҙып,
Ҡайҙа ғына барайым мин һинән башҡа, һинән уҙып.
Һин булмаһаң, йөрөр инем әле, бәлки, аҙып-туҙып,
Һуңғы һалам итеп, һиңә йәбешәмен гелән, ҡыҙым,
Ышанысым, таянысым, йыуанысым — кинйә ҡыҙым.

## Әсә теләктәре

Ғүмер юлдарығыҙ ҡупшылды,
Сәстәрегеҙ сәскә бәйләнде.
Булһын инде бөтә тормошоғоҙ
Киләсәктә сәскә бәйләме.

Һеҙҙең бәхет — ул бит беҙҙең бәхет,
Күркәм яҙмыш һеҙҙе көтһәсе.
Итәк тулы ейән-ейәнсәрҙәр
Йәшәйеште дауам итһәсе.

Һөйөүегеҙ мәңге һүнмәйенсә
Оҙатып барһын ғүмер буйына.
Никах туйын күрҙек, насип булһын
Инде көмөш, алтын туйы ла.

## Ейәнем

Оло бәхет икән дә ул –
Ейәндә бағыу,
Күңелемә бер йыуаныс,
Йәнемә дарыу.
Һөйөп туйып булмай ҙаһа –
Таныһыҡ ейәнем.

Йөрәгемә мөлдәрмә
Шатлыҡ тейәнем.

Онотолдо хәсрәттәрем,
Донъям түңәрәк.
Йәшлегеләр килеп китте,
Күңел – күбәләк.

Ҡараңғы төндә балҡыған,
Гүйә, ул һилал*.
Әйтә кеүек: «Нурҙарымды,
Өләшәй, һин ал!»

Бер ни менән үлсәп булмай
Ейән биргәндә.
Гонаһһыҙ сабый ҡырында
Йәнем тәҙәлде.

## Һылыуыма

*Бер туған һеңлем Хәкимова Вәзилә Зариф ҡыҙына*

Яҙғы елдәр, һылыуыма
Бәхет биреп үтегеҙ –
Ҡоштар һымаҡ, ояһында
Матур ғүмер итерлек.

Яҙғы нурҙар, һылыуыма
Әйҙә, йылы һибегеҙ,
Биттәренән минең өсөн
Йомшаҡ ҡына үбегеҙ.

* Һилал – яңы тыуған ай.



Йәшел бәрхәт үлән-келәм
Аяҡ аҫтыңда ятһын,
Йөрәгеңдә умырзая
Йыл буйы сәскә атһын.

Күҙ йәштәре — ҡар һыуҙары
Кибеп юҡҡа сыҡһындар.
Күңелем һине — күҙ нурымды
Ғүмер буйы юҡһыныр.

***

Килеп еткән ғүмер урталарың –
Йәй уртаһы кеүек йәмле, пак.
Донъяларың күкрәп сәскә атҡан,
Еләк-емештәрең бешкән саҡ.

Ғүмереңдә йәй уртаһы булһа,
Йөрәгеңдә һаман яҙ һинең.
Әллә яҙҙа тыуғангамы икән,
Күңелең тулы йылы наҙ һинең.

Ҡояш нурын тигеҙ өләшкәндәй,
Тик изгелек кенә сәсәһең.
Ғүмер миҙгелдәрен биҙәп торған
Һин бит үҙең гүзәл сәскәһең.

Тирә-йүндең йылылығын тойоп,
Сәскә атып, оҙаҡ шиңмәйсә,
Ел-дауылдан Хоҙай үҙе һаҡлап,
Йәшә ҡайғы-хәсрәт һиҙмәйсә!

## Тыуған йорт

*Кинйәбеҙ ауылынан сыҡҡан ир-уҙамандар Фәрит һәм Сәғит Нәҙершиндарға бағышлана*

Изге юлда йөрөй ысын ирҙәр,
Ҡоротмайса атай нигеҙен.
Ауыл күрке булып ултырған өй
Оҙаҡ йәмләр әле ил йөҙөн.

Туғандарын, күрше-күләндәрен
Йыйып өсөн улдар ашыға.
Ҡайтҡан һайын, һағынып тыуған йортто,
Әсәй сығыр тәҫлә ҡаршыға.

Ологая килә, туған тупраҡ
Ныгыраҡ тарта бара, шикелле.
Тыуып үҫкән яҡты, ауылыңды
Онотоуы инде икеле.

Һеҙ ҡайтыртмай кемдәр ҡайтыртһын һуң,
Ил-йорт хәлен кемдәр яҡшыртһын?
Һеҙҙең кеүектәрҙең йөрөгән юлын
Изге нурҙар ғына яҡтыртһын.

## Һағыш

Күңел моңһоу...
Ҡар тауына барҙым
Сана шыуа бала-сағалар,
Таралып та төшөр һағыштарым,
Сабый тауыны, тип, лауалар.

Булып булмай икән сабыйҙарса,
Алдап булмай икән күңелде.
Яңғыратып көлдөм балаларса,
Ә күҙҙәрем йәшкә күмелде.

Эй бала саҡ! Бар кеше дуҫ һиндә,
Донъя тулы шатлыҡ, һиненсә.
Тауҙан шыуыуын да, көлөүең дә
Тиҙ үҙенсә генә, үҙенсә.

Йылмайһам да хәҙер,
гел моңһоулыҡ
Янда тора һәр саҡ һағалап.
Йүгертәйем тиһә мине шатлыҡ,
Һағыш килеп ала яғалап.

## Айгөләмә

Айгөләм, һин –
минең нурлы гөләм,
Күңелкәйең тулы бөтмәҫ наҙ.
Бер бите – ай,
ә бер бите – ҡояш,
Әкиәттән килгән гүзәл ҡыҙ.

Айһыҙ донъя нурһыҙ,
төлһөҙ — йәмһеҙ,
Сәскә ат һин гөрләп, төлдәй, гел.
Йөҙҙәрен нур һипһен
айҙай балҡып,
Ғүмеркәйең үтһен ал да гөл.

## Ләйсәнем

Ләйсәнем һин минең, әхирәтем,
Һиңә булһын оло рәхмәтем.
Гелән шулай көләс йөҙлө булып,
Йәшә күреп тормош рәхәтен.

Ләйсән ямғыр яуһын, ҡалҡһын йәйгор,
Яҙмаһын тик күҙ йәш түгергә.
Йылы ләйсән тамсылары, гүйә, -
Шифа булып тамдың күңелгә.

## Ҡояшлы ямғыр*

(романс)

Ҡояшы ла, ямғыры ла бергә:
Йәйҙең һуңғы айы — көҙ етә.
Күҙ йәштәре аша йылмайырға
Бер генә нур — йылы һүҙ көтәм.

* Н. Шәрәфетдинов музыкаһы.



Итәғәтле, сабыр үә инсафлы
Өс ҡыҙ бүләк иттем донъяға.
Ғүмер үкенескә үтмәне тип,
Шөкөр итәм әле Аллаға.

Ошо байлығымдың араһында
Башҡа бөтә нәмә — ваҡ-төйәк.
Барыһы ла ығы-зығы ғына...
Нисек түҙҙең икән, ах, йөрәк?!

Инде, Хоҙай, ғәзиз балаларҙы
Рәхимеңдән берүк айырма,
Фатиха бир изге эштәренә,
Тура юлдарынан ҡайырма.

... Тәҙ(е)рәмдән ҡарап торам әле
Ҡояшлы ла ямғыр яуғанын.
Күңел күҙем ҡабат күрмәҫ булды
Ҡуш тирәктең береһе ауғанын.

Йәшен һуҡҡан тирәк тормаҫ инде...
Төптән сыҡҡан күпме үҫенте!
Ҡояшлы ла ямғыр шифалары
Тамырҙары буйлап үрелһен!



## Көйөргәҙе буйы

Көйөргәҙе буйы ялан-сәхрә,
Ҡыпсаҡ, бөрйән, тамъян үҙ иткән.
Ермолайҙар күпме рәнйетһә лә,
Һис бөтмәгән башҡорт, үс бөткән.

Көйөргәҙе буйы ялан-сәхрә,
Сәхрәләрҙе әрәм итмәйек.
Ни кисерһәк, бергә кисерәйек,
Төйәккәйҙе ташлап китмәйек.

Көйөргәҙе буйы ялан-сәхрә,
Яланында йылҡы өйөрө.
Туғайҙары тулы аңдыҙ, еләк,
Һыуҙарында ҡаҙы, өйрәге.

Көйөргәҙе буйы ялан-сәхрә,
Шунда үтә ғәзиз ғүмерҙәр.
Ата-баба рухын рәнйетмәйек,
Гөрләп торһон төрлө көй ерҙә.

## Күмертауым*

**(йыр)**

Күмертауым минең, бала саҡтан
Бер сер булып индең күңелгә.
Һинең йылылыҡты тойоп үҫтем,
Һүнмәҫ һөйөү һиңә ғүмергә.

* Р. Мөьмининың музыкаһы.



Ҡушымта:
Күмертауым — тыуған ҡалам,
Һинән һәр саҡ йылы алам.
Йыраҡ юлдар саҡырһа ла,
Һиндә ҡалам, ғәзиз ҡалам!

Йылдар буйы алыҫ-алыҫтарға
Өләштең һин күпме йылылыҡ!
Күмертауым минең, гүзәл ҡалам,
Ҡалырһың һин мәңге йыр булып.

## Ҡайтып төштөм

Тыуған ерем ята йөрәгемдә,
Торған ерем бүтән булһа ла.
Тыуған өйөм тарта күңелемде,
Яҙмыштарым кире ҡыуһа ла.

Ғәзиз әсәм миңә ғүмер биргән,
Тыуған төйәк бирҙе ҡанаттар.
Әсәм, ерем мине кеше иткән,
Шуға ҡуя хаҡлы талаптар.

Изге эштәр генә эшләр саҡта,
Сит илдәрҙә бөгөн мин — солтан.
Тыуған ерем, һиңә сарсағас та,
Ҡайтып төштөм әле мин — олтан.

## Ташҡойом
(йыр)

Һиңә килә́м һәр йыл һайын,
Ташҡойом, эй, Ташҡойом.
Сылтырап аҡҡан һыуҙарыңа
Серем һөйләп, баш ҡоям.

Ҡушымта:
Ташҡойом, Ташҡойом,
Эҙем ҡалған таш һайын.
Һалҡын һыуың йәшем йыуһа,
Еңеләйә башҡайым.

Бөҙрә талдар һағышланған,
Башын эйгән йәш ҡайын.
Бала саҡтан яҡын миңә
Ҡыҙыл ярҙың таһҡайы.

## Таң

Күкһел шаршау асылғас та, ана,
Мөләйем таң-һыҙыу күренде.
Алһыу шәлен наҙлы елгә сөйгәс,
Шәл суҡтары уның һүрелде.

Алтын суҡтар күктә ялтырашып
Сәләмләйҙәр, һөйөп, тын ерҙе.
Ебәк шәлдең алһыу шаулаһе бит
Уға шулай сихри төҫ бирҙе.



Офоҡ-сәхнә тынлыҡ ҡосағында,
Төн шаршауы инде юғалған.
Алһыу йөҙлө көләс таң-һыҙыуҙан
Һибелеп тә генә нур ҡалған.

## Ҡышҡы этюд

Ялан-сәхнә ап-аҡ. Вәт мөғжизә!
Гүзәллектән күҙҙәр ҡамаша.
Гүйә, нәфис балерина инде,
Ҡарҙар оса — хозур тамаша!

Ҡышҡы урман
сихри моңға сумған,
Сыңлай keүек талсәр бәҫ-боҙҙар.
Ҡар бөртөккәйҙәре, эй, бейейҙәр,
Әйтерһең дә, йәп-йәш саф ҡыҙҙар.
«Йылмай! Йылмай!» -
тигән keүек улар,
Ниндәй сафлыҡ, ниндәй гүзәллек!
Болоҡһоған моңһоу күңелкәйем
Асылмайса оҙаҡ түҙәрме?



## Юлда

Офоҡта Сулпан емелдәй,
Һыҙылып ал таң ата.
Ғүмеремдең эңерендә
Күңелдә ҡояш ҡалҡа.
Йәш саҡта беҙ ҡояш менән
Уҙыштыҡ – үтә алманы.
Ынтылһам да хәҙер күпме,
Ҡояшҡа етә алмайым.
Күҙ асып, күҙҙе йомғансы
Көндәр, төндәр тиҙ үтә:
Бына әле ҡояш сыға –
Хоҙайға шөкөр итәм.
Тағы бер көн бирҙең тиеп,
Юлымды дауам итәм.

## Ижад

Яңғыҙлығым менән беҙ икәүбеҙ -
Мин үҙемде яңғыҙ тоймайым.
Яҙмышым бит минең үҙемдеке,
Һис бирәүгә көсләп тағмайым.

Иңдәремә ҡунған фәрештәләр
Ҡанаттарын елпеп көр бирә.
Баш осомда оса шиғырҙарым,
Ә ҡулымда ҡәләм тирбәлә.



Күптән көткән хыялым был минең -
Ижад диңгеҙендә йөҙөүҙәр.
Башҡа донъя юҡ та кеүек миңә,
Башҡа яҡҡа юлдар өҙөлгән.

Йондоҙ-серҙәштәрем, сөкөрҙәшеп,
Нур-бүләктәр ташый йыһандан.
Мин теләйем ярым айға ҡарап:
«Айырмаһын берүк имандан,
Айырмаһын берүк ижадтан!»

## Шиғырҙарым

Әлдә һеҙ бар әле тормошомда,
Шиғырҙарым – күңел дарыуҙарым.
Һеҙ булғанға һағыш таралалыр,
Юҡҡа сыға йонсоу, арыуҙарым.

Һеҙҙең ҡанат менән күккә осам,
Һеҙгә ҡуш(ы)лып үҙем йырлайым.
Һеҙҙең менән бергә тын аламын,
Һеҙҙән нисек айырылайым?

Йәшәтәләр мине, йәшәртәләр
Шиғырҙарым – күңел дарыуҙарым.
Улар менән һиҙелмәй ҙә ҡалыр
Баҡыйлыҡҡа китеп барыуҙарым.

## Йылы күҙ

Көтмәгәйнем, өмөт итмәгәйнем,
Йылы күҙҙәр әле булыр тип.
Ҡара күңдән йөрәк өшөп бөткән –
Йән ирейә, мәле уныр бит.

Шундай матур күҙ ҙә була икән,
Эҫе йәйен торһон арыраҡ.
Ял итә һил күңел, ҡайнар хистән
Армаһыҙ ҙа булып арыһаҡ.

Илла йылы миҙгел тора әле –
Түтел ҡаҙимте күҙ ғәҙәте.
Һәр нәмәнең була үҙ мөҙҙәте –
Эй Тәңренең тиңһеҙ ҡөҙрәте!

## Кәрәкмәй

Эсемдәге — тынымда,
Миңә коршау кәрәкмәй.
Рух ирекә ынтыла –
Уға тышау кәрәкмәй.

Күҙҙәр — күңел көҙгөһө,
Йөҙгә шаршау кәрәкмәй.
Сабыр төбө һар(ы) алтын,
Йәнгә шау-шыу кәрәкмәй.



Мөхәббәт — йөрәк сире,
Тик дарыуы кәрәкмәй.
Йән теләр йылан итең,
Тик ағыуы кәрәкмәй.

Хистәр ялҡындай янһын,
Тик яҫтығы кәрәкмәй.
Ғүмерҙәр оҙон булһын,
Тик артығы кәрәкмәй.
Кәрәкмәй шул, кәрәкмәй!

## Йөрәктә наҙ сәскә ата
(романс)

Шиңгән гөлдәр моңһоу ғына
Япраҡтарын ҡойған саҡта,
Һағыш тулы томан аша
Үткән ғүмер, бер төш һымаҡ,
Күҙ алдына килеп баҫа.
Күп нәмәне был тормошта
Аңлайбыҙ шул һуңлап ҡына...

Үкенестәр генә ҡалған...
Минең менән шул үткәндәр
Булмағандыр... әллә булған?
Һеҙҙең ғүмер бит уҙмаған -
Һағыштарҙы ҡалдырып тор.
Йөрәктә наҙ сәскә ата,
Йырланмаған күп йырҙар бар,
Әйтелмәгән күп һүҙҙәр бар.

# Муйылдарҙы һындырмағыҙ...

(романс)

Муйылдарҙы һындырмағыҙ,
Миләштәрҙе лә оҙмағыҙ,
Дуҫтарығыҙ эргәһендә
Усаҡтарға ут өҫтәгеҙ.

Мәшәҡәттәрҙе онотоп,
Тыңлағыҙ гитара сыңын.
Тағы иҫкә төшөрөгөҙ
Онотолған вальс моңон.

Тәүге мөхәббәт хистәрен,
Йәшлектәге ал таңдарҙы,
Йөрәктәрҙә уйылып ҡалған
Аҡыл етмәҫ хыялдарҙы.

Шуныһыҙ йәшәү йәме юҡтыр,
Күңелдәр таш булып ҡатыр.
Хәтерләгеҙ... Тик һыуыл саҡта
Йөрәктәрҙә һөйөү ҡалыр.

Муйыл сәскәләре менән
Биҙәкләнгән сәстәребеҙ.
Әсе миләш тәлгәштәре –
Әйтерһең, күҙ йәштәребеҙ.



Муйыл сәскәһе еҫенән
Бер минутҡа иҫерәйек,
Уйҙарыбыҙ менән бергә
Йәш саҡтарға йүгерәйек.

Миләштәрҙең ялҡындары
Йөрәктәрҙе өтөп алһын.
Йәшлегемә ҡайттым тиеп,
Әйҙә, күңел бер алданһын.

# Яҙмыш диңгеҙендә

Тормош мине яҙмыш диңгеҙендә
Бер батырҙы, берсә ҡалҡытты.
Берсә ҡойон эстәрендә ҡалдым,
Берсә ҡояш йөҙөн балҡытты.

Күрәсәктең көслө тулҡындары
Сыныҡтырҙы мине ныҡ ҡына.
Ҡара пәрҙә — болот япмаһынан
Нур көлтәһе күренә саҡ ҡына.

Дауылдарҙан сыҡтым имен-аман,
Шуға ғәзиз миңә рух ирке.
Һаҙлыҡтарҙан, Тәңрем, үҙең һаҡла,
Күккә күтәрелер көс бирсе!

## Өмөттәр

Вакыт тигәндәре тормай туктап,
Көндәр, айҙар һыуҙар кеүек аға.
Ҙур өмөттәр бағлап яңы йылға,
Киләсәккә тағы кеше баға.

Былтыр аҡланмаған өмөттәргә
Иҫе китмәй әҙәм балаһының,
Бата-бата тарих төпкөлөнә,
Онотола бит ул барыһы ла.

Әйҙә, ап-аҡ ҡарҙай аҡ өмөттәр
Солғап алһын, күңел сафланһын.
Йәнәш йәндәр осһон зәңгәр күктә,
Һирпеп өмөтһеҙлек япмаһын.

## Ҡуласа

Йәшәү көсө, бәхет тоҫо
Эҙләнем мөхәббәттән.
Хыянаттан башҡа бер ни
Күрмәнем хәбәхәттән.

Ҡайҙа барма — алдаҡ, ыҙа...
Башты илтергә ҡайҙа?
Яҡлау эҙләп, Зөһрә кыҙҙай,
Осоп китергә Айға...



Ул бит ҡыҙҙы арыҫлырған
Мәңгелек яфаларҙан.
Ҡотолормо әҙәм бер саҡ
Ерҙәге хафаларҙан?

Барыбер һөйә, донъя ҡөтә,
Тырмашып йәшәй кеше.
Тормош-ҡуласа әйләнә,
Һис кемдә лә юҡ эше.

## Яҙҙар етә...*

**(йыр)**

Яҙҙар етә, тормош дауам итә,
Бармы уны быуыр бер кәртә?
Мин ҡуймайым ғашиҡлыҡҡа нөктә,
Әле быға иртә, бик иртә.

Ярһыу яҙҙар еҫе, ай, иҫерткес,
Хистәр морон төртә илерткес.
Һөйөү — йәшәү,
тыңдәш тик йәшнәүгә,
Мин ҡуймайым нөктә йәшәүгә.

Тойғоларҙың килә аҫты-өҫкә,
Күңел ҡылы дәртле көй сиртә.
Мин ҡуймайым үҙ-үҙемә нөктә,
Әле быға иртә, бик иртә.

---

* Р. Хәйбуллин музыкаһы.

## Минең доньям

Үҙ доньямды ҡорһап алдым:
Шиғырҙан уның түшәме.
Юҡ әле мин өшөгәнем –
Ҡайнар хистәрҙән түшәгем.

Бер ҡараһам — ҡояш көлә,
Бер ҡараһам — ай йылмая.
Ни нәмәнән ояларға -
Оямда һәр сак түл, мая.

Минең доньяма инергә
Һис хаҡы юҡ бер кемдең дә.
Үҙем кескәй бер олла,
Йөрәгемдә — бөтә донья.

***

Эй, ямғырым!
Йүгереп йөрөп, урман-яландарҙы
Сөм йәшелгә манған сағыңда;
Елкендереп күңелен һандуғастың,
Дәртле көйҙәр ҡойоп ҡағынһаң;
Ҡунып сос ҡарлуғас ҡанатына,
Ер өҫтөнән елеп үткәндә;
Көткән йөрәктәргә өмөт өҫтәп,
Тәҙрәләргә шаян сиртәндә;



Гәүһәр йәйғор нурын тамыҙғанда
Саф иртәлә сабый гөлдәргә;
Япраҡтарға ыйыу теҙә-теҙә,
Сер һөйләһәң ҡолон-елдәргә, –
Ситләп үтмә, йәме, мине лә:
Йәйғор-сиҡ ҡуй моңһоу мәлемә!

## Тоҙйылғаҡай

Ғашиҡ булдым мәғрур тауҙарыңа,
Әсир итте һомғол шыршылар.
Йөрәгемә майҙай ағылдылар
Тоҙйылғала көмөш шаршылар.

Һәр ташыңды, һәр бер тамсыңды ла,
Тоҙйылғаҡай, тиҙ үк үҙ иттем.
Шат тауышлы йылтыр сылбырыңды
Иҫем китеп көн дә күҙәттем.

Инйәрҙәге йәрҙәр ғорур тиҙәр,
Тауҙарҙан был, бәлки, күскәндер.
Күпме шулай Инйәр сибәрҙәре
Һөйөү газаптарын кискәндер.

Тоҙйылғаҡай, татлы һыуҙарыңды
Инйәренә илтеп ҡояһың.
Әсе яҙмыш насип булмаһын тип,
Шифа һыуың эсеп ҡуямын.

# Юшатыр

Бормаланып-бормаланып аға
Моңһоу йылғам минең – Юшатыр.
Башым эйеп киләм әле уға -
Ҡайғы-хәсрәтемде бушатыр.

Юшатыр, Юшатыр,
Күңелемде йыуатыр.

Юшатыр ҙа буйы тал-тирәктер,
Яңғыҙ тирәктәре һирәктер.
Ауыр саҡта күңел йыуатырға
Тоғро дуҫ-иштәрең кәрәктер.

Юшатыр, Юшатыр,
Күңелемде йыуатыр.

Юшатыр ҙа буйы бушап ҡалды,
Һин йөрөгән эҙҙәр юғалды.
Бормалы ла үткән ғүмерҙәрең
Мәңгелеккә табан юл алды.

Юшатыр, Юшатыр,
Күңелемде йыуатыр.



***

Әллә нигә һыҙлап килде яҙҙар:
Ала-ҡола булып ята ерҙәр,
Иремәй ҙә ҡуя һуңғы ҡарҙар,
Теңкәләргә тейә әсе елдәр.

Әллә етмәй ҡояш йылылары,
Болоттар ҙа бер саҡ таралырмы?
Күк үләнгә аяҡ баҫыуҙары
Уңалтыр ҙа йөрәк яраларын…

Ала-ҡола ғына яҙмыштарым,
Иремәгән һуңғы ҡарҙар һымаҡ.
Һыҙлап килһен инде көҙ, ҡыштарым,
Бәхетем дә инде барҙыр һымаҡ…

## Төн
**(элегия)**

Серле алтын ай биҙәгән
Зәбәржәт күктең көмбәзен.
Ерҙән шыршылар төбәгән,
Ҡарайып, осло көбәген.

Кескәй йондоҙсоҡ емелдәй
Эргәһендә айҙың елендәй.
Һөттән пак нурҙар беленмәй
Ирей ҙә күҙгә эленмәй.

Аһ, шомло болоттар, боҫоп,
Алдылар ай, йондоҙҙо ҡосоп.
Ах, төшкәйне йондоҙ осоп,
Ала һалдым уны тотоп.

## Барыбер бәхетле булам мин

Яңы йылда һуғыр әле, тием,
Көткән көткән йондоҙ сәғәтем.
Һүнгән шәмдәлдәрем тоҡаныр ҙа,
Гөлт ҡабыныр нурлы бәхетем.
Барыбер бәхетле булам мин!

Бар хәсрәтләк миңә тимәгәндер,
Хәттин ашҡан минең күргәндәр.
Ҡойроҡтарын ҡыҫып, шымып ҡалыр
Яһиллашып миңә өргәндәр.
Барыбер бәхетле булам мин!

Тормош ҡуласаһы тик тормай ул,
Артта ҡалыр ҡара һыҙаттар.
Алдымда тик аҡ юл ғына күрәм:
Үтеп китте елеп буҙаттар.
Барыбер бәхетле булам мин!

Беҙҙең урамға ла байрам килер,
Өйөр-өйөр ҡуйҙай артылып.
Тәҙрәләтер гел ырыҫлы көндәр,
Бер-береһе артынан тартылып.
Барыбер бәхетле булам мин!



## Умырзаям – минең йәшлегем

Йәшлек – ғүмер яҙы,
Дәрт-дарманлы сағы.
Йәшнәп-күкрәп уҙа,
Кире ҡайтмай тағы.

Ашҡынып тормошҡа,
Ынтыла ҡояшҡа
Умырзаям – минең йәшлегем.

Йәшлек – гөлдәр наҙы,
Сәскә атҡан сағы.
Тағы ҡабатланмаҫ,
Ҡабат атмаҫ таңы.

Ашҡынып тормошҡа,
Ынтыла ҡояшҡа
Умырзаям – минең йәшлегем.

Йәшлек – йылға шауы,
Гөрләп ташҡан сағы.
Яҙ гөлөн һуғарыр
Гөрләүек һыуҙары.

Ашҡынып тормошҡа,
Ынтыла ҡояшҡа
Умырзаям – минең йәшлегем.



## Ғәҙеллек

Ғәҙеллек тигән нәмә юк
Был ҡәһәрле донъяла.
Эҙләп-эҙләп тә тапмағас,
Ҡул һелтәй ҙә ҡуялар.

Көрәшеүҙән фәтүә юк –
Башыңа бәлә алма.
Ғәҙеллек өсөн көрәшеү –
Ғәҙәт икән «алама».

Китһәм дә мин бәхетлелеккә,
Был донъя түгел йәлке.
Ғәҙеллек барҙыр әле, тим,
Теге донъяла, бәлки.

Ҡайҙа икән ул ғәҙеллек –
Буталып бөттө башым;
Таш менән атҡандарға ла
Әҙер тора бит ашым…

Хоҙай барыбер күрәлер
Кемдең кем икәнлеген.
Ғазаплы ерҙең йөҙөнән
Китһәм дә үкенмәйем.



## Табипка

Табип, һинең тылсым көсөң менән
Сихәтләнә күпме кешеләр!
Хоҙай ебәргәндер һине беҙгә,
Алла улы – һинең эшеләр.

Ҡайҙан шундай көс алаһың икән?
Ғаләмдәндер килә ул һиңә.
Мөғжизәләр кире ҡайтһын ине
Оло сауап булып үҙеңә.

Һиңә тартылалар һәммә халыҡ –
Барҙыр бының берәй ғилләһе.
Барса изгелекте бирә йыйып,
Килә һиңә бүләк итәһе.

## Май кисе

Зәңгәр ҡорма тартып,
тынныҡ ҡына
Йән һөйгәнен ҡасып күҙәткән
Йәш һылыу ҡыҙ кәүек бер алмағас
Майҙың айлы кисен үҙ иткән.

Йәшел тамсы кеүек япраҡтары
Йәшәү эсен бөркә донъяға.
Неска ботаҡтары араһынан
Йондоҙ йүгереп сыға баҡсаға.

Ул һоҡлана күктән, ә мин ерҙән:
Гүзәл минең һәр көн, һәр бер төн.
Ошо гүзәллектәр араһында
Матурланам кеүек көндән-көн.

1972 йыл.

## Тәүбә

Һаңға һуҡмай бөтөн булмышымды,
Үҙ-үҙемә иттем хыянат.
Ә хыянат йүнле нәмә түгел:
Күңелемдә ҡупты ҡиәмәт.

Хыянат — ул бәхетһеҙлек башы,
Сылбыр кеүек китә бәләләр.
Белһәләр ҙә, үҙенекен итә
Гонаһтарға батҡан бәндәләр.

Нәфсе ҡоло булыу — оло ғәрлек,
Һәр ҡылыҡҡа әжер әҙер бит.
Хәләленә генә баҙнат ит тә,
Тәүбә тиеп, тәүҙә сабыр ит.

Шулай тиеп хәҙер үҙ-үҙемә,
Булмышыма ҡайтам яңынан.
Ғорур ғына үтеп китәм әле
Нәфсе тыймағандар янынан.

Күңел тыныс, ә уйҙарым яҡты,
Урынында кеүек бар нәмә.
Баш осомда ҡояш көлөп тора,
Башҡа ни кәрәк һуң был йәнгә?!





Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы атайым Зариф Миһранов һәм әсәйем Шәмсеҡәмәр.



Әсәйем менән тыуған йортобоҙҙа.



Өфөлә "Китап" нәшриәтендә мөхәррир булған саҡтар.





Стәрлетамаҡ пединститутында.
"Ашҡаҙар" әҙәби түңәрәгенә йөрөүселәр.



Салауат педучилищеһында уҡыған йылдар.

«Юшатыр» гәзитендә хәбәрсе булып эшләгән осор.







Өс ҡыҙым – өс таянъым:
олоһо Гөлназға – 11 йәш,
уртансыһы Гүзәлгә – 9 йәш,
кесеһе Айгөлгә – 1,5 йәш.
Күмертау ҡалаһы.



Миңә – 50 йәш.
Көйөргәҙе район хакимиәте вәкиле ҡотлай.



Бер туған һеңлем ике улы Руслан һәм Рөстәм Хәкимовтар менән.



Киңйә ҡыҙым Айгөл менән Әнүәр кейәү Хисмәтуллиндар.





Оло ҡыҙым Гөлназ, ейәнсәрем Алина, ейәнем Артур Сәлишевтар.



Уртансы ҡыҙым Гүзәл һәм ейәнем Рәмис Аҡкилдиндар.

# Тыуған көн

Тыуған көнөм – буранлы ай:
Өйөрөлә ап-аҡ ҡар.
Күңелемдә буран уйнай –
Ыжғыр елле яҙмыштар.

Сорнаған аҡман-тоҡмаплай
Хис-тойғо йөрәгемде.
Тәрән көрттәрҙе йырғандай
Үтәм күрәсәгемде.

Тыуған көнөм – буранлы ай:
Бер тына, бер дауыллай.
Йәшәлгән ярты быуаттай
Ғүмерҙе, гүйә, барлай.

Булды инде барыһы ла:
Бураны ла, селләһе.
Тағы ниҙәр бар күрәһем –
Шуны килә беләһе.

# Еләк

Силәк тә генә силәк йыйҙым еләк,
Силәккенәм бер ҙә тулманы.
Силәккенәм бер ҙә тулманы ла,
Үҙ бәхеткәйҙәрем булманы.

Силәк тә генә силәк йыйҙым еләк,
Ҡыҙарып та(й) бешкән еләгем.
Талмаһып да инде, ай, йөрәгем,
Талһа талһын инде беләгем.



Силәк тә генә силәк йыйҙым еләк,
Еләклегем етмеш саҡырым.
Ҡайҙа ғына тороп ҡалды икән
Бешкән еләк кеүек саҡтарым?

Силәгемә генә төшкән тамсы
Әллә ысыҡ, әллә йәш микән?
Уйнап ҡына көләп
йөр(ө)гән саҡтар
Әллә ысын, әллә төш микән?



# Күмертау таҡмаҡтары

Аҡмулланың йыйынына
Күмертауҙар ҙа килде.
Уҡыуҙа, эштә, ялда ла
Күтәрәләр күңелде.

Бер ҡасан да бирешмәйҙәр
Күмертауҙың йәштәре.
Йырлайҙар ҙа, бейейҙәр ҙә,
Гөрләп бара эштәре.

Күмер тауының башынан
Миәкәләр күренә.
Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ
Табынығыҙ түренә.

Беҙ ҡунаҡсыл, беҙ йомартбыҙ,
Барығыҙ ауыҙ итегеҙ.
Үҙегеҙ ҙә юл төшкәндә
Күмертауға килегеҙ.

***

Мөхәббәт – сир, тиҙәр;
Дөрөҫ икән:
Йүнәлмәй ҙә торған ауырыу –
Бар йәнем-тәнемә һөйөү йоҡҡан,
Арына алмай унан аурам,
Ағыуланған хатта бауырым...
Шулай ҙа ул йөрәк, күңел сире –
Юҡ һөйөүҙән башҡа бер сере.
Үҙем менән һине алып китәм,
Мөхәббәтем – мәңгелек халәтем.

## Сирень ҡыуағы

Ултырттым мин әсәм ҡәберенә
Үҙе һөйгән сирень ҡыуағын.
Әйҙә, сәскә атһын, хуш еҫ бөркһөн –
Ҡәҙерлемдең рухы ҡыуанһын.

Исән саҡта гөрләп үҫә ине
Баҡсаһында сирень ҡыуағы.
Хәтеремдә уның тәнәтмәһен
Сирле аяғына ыуғаны.

Бәхиллыҡҡа күскәс әсәкәйем,
Ҡороп юҡҡа сыҡты сирене.
Өрмәгән ергә ултыртмаҫ инем,
Кире ҡайтһа әсәм терелеп.

– Фани донъяларҙа ҡәҙерҙәрен
Белдеңме? – тип һорай сиренем.
– Ғәфү үтенергә инде һуң шул,
Һуң... – тип ҡабатлай гел иренем.

## Күгәрсен

**(һамаҡ)**

Күгәрсен тәҙрә төбөндә
Гөрләй былай тип көн дә:
– Гөлдәр-гү, гөлдәр-гү,
Беҙҙә йәмле яҙҙыр ул.
Гөлдәр-гү, гөлдәр-гү,
Гөлдәй матур ҡыҙҙыр ул.
Гөлдәр-гү, гөлдәр-гү,
Гел дә иркен илдер ул.
Гөлдәр-гү, гөлдәр-гү...
Күгәрсендең гөрөлдәүе –
Аңлайышлы телдер ул.
Тыныс илдә бәхетле ҡыҙ –
Уныһы инде һиндер ул.



# Матур үтә көндәрем

Тәрә төбөмдә лә гөлдәр,
Өҫтәлемдә – гөлдәрем.
Гөлдәр үҫтергәнгә микән,
Матур үтә көндәрем.

Йырҙар көйләй ҙә йөрөйөм,
Шиғыр яҙам төндәрен.
Күңел тулы хис булғанға,
Матур үтә көндәрем.

Баш осомда ҡояш балҡый,
Гөрләй күгәрсендәрем.
Илдә тыныслыҡ торғанға,
Матур үтә көндәрем.

# Күгәрсен күҙҙәре

Күк йөҙөндәй зәңгәр балаҫ
Түшәлгәйне тауымда.
Аунап үҫтем шул балаҫта
Ялан тәпәй сағымда.

Күгәрсен күҙҙәре,
Күгәрсен күҙҙәре!
Ҡайҙа икән һеҙҙә ҡалған
Кескәй ҡыҙҙың эҙҙәре?

Зәңгәр сәскәләр юҡ хәҙер,
Йыуалар ҙа юғалған.
Тәүге мөхәббәт һуғарған
Йәшлек юлы юйылған.

Күгәрсен күҙҙәре,
Күгәрсен күҙҙәре!



Ҡайҙа икән һеҙҙә ҡалған
Үҫмер ҡыҙҙың эҙҙәре?

Аҡморонға ла мендем,
Текәтауҙы тапаным.
Бала саҡтың, йәшлегемдең
Һуҡмаҡтарын тапманым.

Күгәрсен күҙҙәре,
Күгәрсен күҙҙәре!
Онотолмай, күҙ алдымда
Йәшлегем сәскәләре…

# Туҡмаҡҡаран*

Ташҡойоно** баҫһа яҙғы ташҡын,
Ярҙарынан ашып Ҡушбүләк,***
Йәш килендәр китә ише һиңә,
Туҡмаҡҡаран,
Көйәнтәгә элеп буш күнәк.

Урғып сығаһың да ағаһың һин
Үлән араһынан, оялып.
Ҡыҫҡа ғына үҙ юлыңды үтеп,
Мәләүезгә**** барып ҡояһың.

Тауыҡ кисеп сыҡырлыҡ ҡына һин
(Борон, бәлки, булғанһыңдыр киң).
Ә шулай ҙа үҙебеҙҙеке бит,
Күңелдәргә яҡын, яҡын бик!

---

Туҡмаҡҡаран*, Ташҡойо ** – Күйөргәҙе районы Бәләкәй Муса ауылындағы шишмәләр. Ҡушбүләк***, Мәләүез**** – шул уҡ ауылдағы йылғалар.

...Бәй, ни ғәләмәт был, атаҡ-атаҡ,
Әстәғәфирулла! Эй Аллам...
Баш осона тәре ҡаҡҡандар бит!..
Һушым юйып, телһеҙ мин ҡалам.

Быуһындар, ти, әйҙә, һыуынһам ла,
Ҡойонһоңдар танһыҡ ҡанғансы.
Анау дәү тәреһе шомло бит һуң...
Әрней йөрәк, лөрләп янғансы.

...Беҙҙекеләр нишә ҡалышһындар?
Ташҡойоно биҙәп ҡуйҙылар:
Таҙарттылар, тәңкә ташланылар,
Баҫҡыс-баҫҡыс таштар уйҙылар.

Услап эсәм, тиһәң, һыуы шиңдәй!
Әйҙә, кипән, йәнем, тик сафлан.
Ял итергә эскәмйәләре бар –
Ултыр ҙа бер уйлан, мосолман!

Юҡ шул, юҡ...
Кәйеф-сафа ҡора ауылдаштар,
Милләтенең белмәй баһаһын.
Ә бер ҡоңло таллар йәлләнеләр
Аҫылынған башҡорт балаһын...

Яҡшыһы ла, яманы ла була –
Ниҙәр күрмәй шишмә буйҙары!
Ҡыҫҡа булһалар ҙа инештәрем,
Осона сығып булмай уйҙарҙың...



***

Буйым етмәҫ йондоҙ тоҫло инең,
Янғанһың да икән яҡында.
Һиҙҙермәнең нишә, оңдашмәнең
Миңә булған хисең хаҡында?

Киске уйындарҙа булдыҡ бергә,
Ҡараманың нишә күҙемә?
Белмәнем бит, белмәнем шул бер ҙә
Битараф түгелеңде үҙемә.

Ишеттем мин, хәтһеҙ ғүмер үткәс,
Һунлап ҡына ошо турала.
Үкенесе йөрәгемде өткәс,
Күңелемдә һағыш ярала.

Бәхетле пар булыр инек бит беҙ,
Ҡайғы-хәсрәт күрмәҫ инем һис.
Һин бәхеткә күмдең икенсене...
Күҙ алдымда йөҙөң иртә-кис.

## Яратам

Оҙатырға киллем...
Айырылышыу минуттары телә бөгерҙе.
Ә һин, ана, йылмаяһың хатта,
Мин — илағың һинең хәҙерге.

Тәҙрәләр әллә боҫланлымы,
Әллә йәшкәҙәне күҙҙәрем?

Һыйы булып ҡунды керпегемә
Бызлаға һыҙған һүҙҙәрең.

Ят күҙҙәрҙән һаҡлайым тип микән,
Юйҙың уларҙы һин тиҙ генә.
Күңелемә яҙылғаны ҡалды -
Иң ҡәҙерле йылы һүҙ генә.

Үҙең киттең...
Һүҙең күҙ алдыма
Балҡып сыға ҡабат-ҡабаттан:
«Яратам», һин –
шатлыҡтарҙың башы,
Бәхет шишмәһе һин, «яратам!»

## Хат

Ябай ғына бер хат алдым һинән,
Ябай ғына итеп, ап-ябай!
Шул ябайлыҡ мине иҫерттесе,
Шул ябайлыҡ — ялҡын, ах, ҡалай!

Әллә минең һөйөүемдән микән
Һүҙҙәреңә һинең ут ҡаба?
Әммә һинең һәр бер ябай һүҙең
Йөрәгемә минең юл таба.

Һөйгән күңел, бәлки, ябай һүҙҙә
Ят күрмәгән ялҡын һиҙәлер.
Йөрәк һинән кескәй хәбәр алһа,
Хыял диңгеҙендә йөҙәлер.



## Айырылышыу

Наҙлы елде урап билкәйеңә,
Йәшел яулыҡ бәйләгәй йәш ҡайын.
Сайҡалған шул ҡайын-төйәгеңдә
Үҙәк өҙә кәкүк моңҡайы.

Болоттарҙы йыйып алмаҡ була
Зәп-зәңгәрҙән торған күге лә.
Сәскәләрҙең һары тажларынан
Ысыҡ тамсылары түгелә.

Ел йырында, шишмә тауышында
Һағыш сеңлай, донъя бойоҡҡан.
Май айында, яҙмыш, моңайтмасы,
Кәкүк яҙмышына юлыҡһам.

## Ете юл сатында

Бына урман, алда — ҡуйы томан,
Ете юл сатында мин торам.
Сейәләнгән яҙмыш йомғаҡтарым,
Ҡайһы тарафтарға юл борам?

Ҡайһы юлдан мин китәйем икән,
Ҡайҙа мине көтә бәхетем?
Бәлки, шул томандар артындалыр
Мөхәббәтем — алтын тәхетем.

Йөрәгемә тереһыуҙар һибер
Ҡайҙа берҙән-берем, яҡыным?..
Ете төн уртаһы... Билдәһеҙлек
Тәҙ(е)рәһен килеп шаҡыным.

## Йондоҙға ла буйым етер кеүек

Мин белмәгән сәскә бөрөһө һин,
Алһыуланып атыр яҡты таң,
Бейек ҡая, ем-ем көлгән йондоҙ,
Янрап китер мон һин яғынан.

Ал гөлдәрҙе һөйһәм сабыр ғына,
Ғашиҡ булып яңы моңдарға,
Йондоҙға ла буйым етер кеүек
Ҡаяларҙа алһыу таңдарҙа.

## Хистәрем

Һәр иртәлә шул уҡ ҡояш бağа,
Шул уҡ нурмы әллә түгелме?
Шишмә һаман тынаҡ йырлап аға,
Шул уҡ йырмы әллә түгелме?

Моңһоуланып ерҙә ҡояш бата,
Ләкин иртән тағы йылмая.
Шатланышып гөлдәр баш ҡалҡыта,
Ирҡә һүҙҙәр уға — түл, мая.



Йөрәгемдә хистәр ҡайнап таша
Минут һайын төрлө-төрлөһө.
Күңелемдә гөлдәр сәскә ата,
Кем өсөн һуң уның бөрөһө?

Йылдар, йырҙар гел-гел алмашына,
Хистәр тағы-тағы яңыра.
Йөрәккенәм сарсай ғашиҡлыҡҡа,
Ҡәкүк булып өҙ(ө)лөп саҡыра.

## Йәй аҙағы

Йәшендәре йәшнәп, күк күкрәтеп,
Үтеп бара инде йәйҙәрем.
Берсә ҡуындары ҡойондора,
Берсә селләләре көйҙөрә.

Аҫыл ебәк йәйғор һалмаҡ кенә
Индәремә төшә — ҡыуаныс.
Йәшен уйнай тик бер мәлгә генә,
Юҡҡа ғына йәйғор-йыуаныс.

Ялағайҙай ялтлап, йәй аҙағы
Үтеп бара — әйҙә, йәшнәп ҡал.
Алда, бәлки, быҫҡаҡ ҡара көҙҙәр,
Үҙәктәргә үтер һалҡын ҡар.

Индәремдән ҡосҡан йәйғор кеүек,
Һөйөүеңдән ҡалды нурҙары.
Елбер-елбер килеп, зарын һөйләй
Йәшен һуҡҡан ҡайын туҙҙары...

## Ғүмеремдә тағы яҙ

Күңел боҙо иреп таша,
Йөрәгем — умырзая.
Тик ҡунаҡбыҙ был донъяла -
Үтмәһен ғүмер зая.

Күҙҙәрең — яҙғы ҡояштыр
Өшөгән йөрәгемә.
Һыңмаҫҡа тип түң ҡайындай,
Һыңғылдым әле һиңә.

Илаҡ таллай, бөгөлөп-һығылып
Йәш түкмәйем мин хәҙер.
Рухым көсө тау-таштарҙы
Аҡтарырға ла әҙер.

Ҡайҙарға ғына ташламай
Бәндәне күрәсәге.
Ризығымы йөрөтә әллә
Кемгәлер бирәсәге.

Бына беҙ ҙә ос(о)раштыҡ,
Ҡараштарҙан аңлаштыҡ.
Тимәк, Хоҙай шулай ҡушҡан.
Етер, оҙаҡ аҙаштыҡ.

Миктәй-миктәй сыҡтым ҡышты,
Ғүмеремдә тағы яҙ.
Рәхмәт инде, эй, яҙмышҡа:
Күңелкәйем тулы наҙ.



## Теҙләнәмен һинең алдарыңда

Һомғол буйҙарыңды күрәйемсе,
Туҡтап торсо тик бер аҙ ғына.
Ҡарашымды алып булмай, гүйә,
Күҙҙең яуын алыр хазина.

Ымһыныуға һүҙһеҙ буйһонам да
Ҡалғым килмәй һинән бер аҙым.
Өндәшергә баҙнат итмәйенсә,
Телһеҙ ҡалам, никтер ҡыҙарам.

Наҙлы ла һин, боҙло ла һин... Нинә
Йәнем һиңә генә ынтыла?
Башым һалғым килә устарыңа,
Теҙләнеп тә һинең алдыңа.

Һинең моңһоу күҙҙәр - төпһөҙ упҡын,
Ғорур һының — серле күк томан,
Өйөрөлөп, тамуҡ уртаһына
Алып китер кеүек бер заман.

## Сират күпере

Яратмау ҙа һине мөмкин түгел,
Ҡауышыу ҙа беҙгә яҙмаған.
Йәшлегемә ҡайтып булмаһа ла,
Ғүмерҙәр бит әле уҙмаған.

Был ни хилла, миңә һине бер ҙә
Онотоп та булмай, илаһым?
Сақырамын һуҙып ҡулдарымды -
Ярлыҡанып әле гонаһым...

Нишләйек һуң, әйтсе, нишләйек,
Яҙмыштарҙы нисек һүтәйек?
Һөйөү ысыҡтарын эсәйек тә
Сират күперҙәрен үтәйек.

## Ай тулғанда

Ай тулғанда, иктер йөрәкһенәм,
Урынында түгел йәнгенәм.
Тулған айҙай балҡыу ҡайҙа инде,
Уйҙар йонсоғандар бәйгенән.

Тынғы бирмәй серле ай ҡарашы,
Тынғы бирмәй сағыу бер йондоҙ.
Һайланыңмы әллә шул йондоҙҙо?
Йондоҙҙар күп, әммә ай яңғыҙ.

Йәнәш булһалар ҙа, алыҫ улар,
Ай тик эйәрсәне Ҡояштың.
Ике йондоҙ ише атылды ла
Йөрәк менән йөрәк ҡауышты.



## Һине көттөм

Һине көттөм, минуттарҙы һанап,
Һыуһыҙ ҡороп киткән гөлдәрҙәй.
Һин килмәнең...
Гөлдәр башын эйҙе,
Күҙ йәштәре һалҡын меңдәрҙә.

Күҙ йәшемә ҡушып, иренең тәмен
Үҙең менән алып һин киттең.
Аңламайым, ниндәй сәбәп менән
Һөйөү усағына һыу һиптең?

Һинһеҙ миңә донъя дөм-ҡараңғы,
Таңдар алһыуланып атмай бит.
Тырышһам да, һинән башҡаларға
Бер ҙә генә күңелем ятмай бит.

## Ыраштҡы

Йөрәгемде минең өҙгөләмә -
Моңһоу ҡарашыңды төбәмә.
Ҡойондорһаң һалҡынлығың менән,
Енел булыр ине йәнемә.

Бәлки, һүнер ине көйөүҙәрем,
Быҫҡып янған усаҡ шикелле.
Күҙҙәрең ҡуҙ оҫтәп торған саҡта,
Һүрелеүем һинән икеле.

Ғазап насип булған яҙмышымды
Үҙгәртергә юҡҡа тырыштым:
Өмөт тулы күҙгә сыуаҡтарҙы
Алыштырҙы боҙло ырашҡы.

## Күрәсәк

Һары һағыш тулы бокалдарҙы
Мөлдөрәмә өйөп күтәрҙек,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ болғансыҡ
Яҙмыш упҡынына этәрҙек.

Әрһеҙ елдәр өҙгөләгән саҡта,
Ҡурсалаусым минең, һин ҡайҙа?
Тирә-яҡта бушлыҡ — ҡот осоҡ!
Алмай хатта үҙ(е)нә һил ай ҙа...

Зөһрә ҡыҙҙай, осор инем шунда,
Кәмһетелмәҫ инем һис кемдән.
Башың ташҡа бәреп олоһаң да,
Ҡотолоу юҡ күрәсәгеңдән.

## Ҡарҙар яуа

Ҡарҙар яуһа, барыһы онотола:
Яҙғы ташҡын, күҙгә өҙөлгөүҙәр;
Күңелемде ап-аҡ хыял солғай,
Ҡайҙа инде һинән төңөлөүҙәр.



Һине күрһәм, барыһы иҫтән сыға:
Әрнеүҙәрем, янып-көйөүҙәрем;
Хоҡуғым юҡ уны яратырға -
Оноторға кәрәк, тиеүҙәрем.

Ҡарҙар яуа ерҙе сафландырып,
Тын алыу ҡайҙары иркенәйә.
Ҡайнар хискә төрөнөп, йөрәккенәм
Ғүмерлеккә һине, иркәм, һөйә.

***

Килеп керҙең миңә ҡара күҙҙә...
Һинең, минең күҙем — ҡотолоу юҡ.
Унан ҡалмай инде беребеҙ ҙә:
Фанилыҡта отоу-отолоу юҡ.

Эҙҙәреңдә ҡаплай ҡырпаҡ ҡарҙар,
Сикәләргә төшкән аҡ сал һымаҡ.
Һығылдым да төштөм алдарыңда,
Башын эйгән илаҡ суҡ тал һымаҡ.

Сәстәр сәскә беҙҙең бәйләнерме,
Күңелдәге ҡояш терелерме?
Һүнгән усаҡҡа тын өрөрһөңмө,
Туңған йөрәккә йән бирерһеңме?

Алһыу күҙлек кейгән күҙҙәремә
Әсе йәштәр тулһа мөлдөрәмә,

Һуалмаҫмы тағы өмөттәрем,
Гәлсәр генә ише селпәрәмә?..

Мин һаман да етә юл сатында,
Һин һаман да күк томән артында...
Тукылғанмы яҙмыш ялғыштарҙан,
Әллә әсе ҡарғышмы затымда?.

## Имән менән ҡайын

Имән менән ҡайын йәнәш үҫә,
Икеһе лә моңһоу, бик уйсан.
Имән күкрәгенә башын һалып,
Ирҡаләнмәҫ ҡайын һис ҡасан.

Аралары ҡул һуҙымы ғына,
Ә ҡауышыу барыбер яҙмаған.
Күпме кеше шулай ғүмер һөрә -
Берҙә булһалар ҙа янғыҙҙар.

## Һағыныу

Йәнгә тыныслыҡ юҡ,
йәм тапмайым:
Шашып һағынам мин яҙҙарҙы,
Зәңгәр күктән һибеләсәк нурҙар,
Бөрөләрҙә шытҡан наҙҙарҙы!



Әллә көтәм яҙҙы, әллә һине
(Йөрәктәре сәйер ҡыҙҙарҙын).
Мин яҙҙарҙа һине тапҡан инем,
Һиндә табам хәҙер яҙҙарҙы.

## Бүләк

Һиңә генә атап алған инем,
Бирелмәйсә ҡалды бүләгем.
Ҡабул ителмәйсә торол ҡалды
Бүләгемдән биг(е)рәк йөрәгем.

Йүгереп йөрөп алдым һиңә бүләк,
Бирелмәҫен уның белмәнем.
Ни етмәне, нимә артыҡ булды -
Аңламаҫһың яҙмыш бизмәнен.

«Һин бит үҙең бүләк», - тигән һүҙҙәр
Ҡолағымда сыңлай һаман да.
Кире ҡайтһын өсөн шул мәлдәрем,
Бирер инем барлыҡ доньямды.

## Сағын

Күҙ килде, тип өҙгөләнмә -
һәр миҙгелдең үҙ йәме.
Ҡайҙа икән йәш сағым тип,
Йәш түкмәле, түҙ, йәме?

Сағыу саған, сағыу саған,
Һөйөләр генә сағың,
Һарғайһаң да, ҡыҙарһаң да,
Килешә һиңә тағын.

Йәш сағың — йәшел сағың,
Йәш саҡтарҙың үҙ гәме.
Әле һинең сағыу сағың –
Инсән саҡ һөйөү тәме.

Сағыу саған, сағыу саған,
Һөйөләр генә сағың.
Һарғайғас та, ҡыҙарғас та,
Йылы һинең ҡосағың.

***

Һин көсләү, ә мин хисле,
Мөхәббәт дауыл төҫлө.
Уғкын — йыһан, уғкын — йыһан...
Донъялар аҫлы-өҫлө.

Һин көсләү, ә мин хисле,
Һөй, һөйөл иртә-кисле.
Ғүмер үтә... Ана, әбей
Ултыра гартып тиҫбе.

Һин көсләү, ә мин хисле,
Кәртә юҡ беҙгә һис бер.



Эшебеҙ юҡ йәшебеҙҙә,
Йөрәктәребеҙ тиҫтер.

Һин көсләү, ә мин хисле,
Түмәр — һөймәгән кеше.
Рәхмәт иңде, әй, Тәңрем,
Биргәнгә һөйөү хисе.

## Мөхәббәт*

(йыр)

Мөхәббәт кешене йәшәтә,
Мөхәббәт кешене йәшәртә.
Мөхәббәтле донъя түңәрәк,
Мөхәббәтле күңел — күбәләк.
Ҡушымта:
Мөхәббәт, мөхәббәт,
Һин беҙгә бик кәрәк.
Мөхәббәт, мөхәббәт,
Һин беҙгә ҙур терәк.

Мөхәббәтһеҙ кеше — түмәр ул,
Мөхәббәтһеҙ ғүмер — күмер ул,
Мөхәббәтһеҙ йөрәк — тимер ул,
Мөхәббәтһеҙ Ғаләм үлер ул.

* И. Туйгилдин музыкаһы.

## Ышаныс

Аҡҡош тоғролого менән һөйөрмөн -
Ышан миңә, ышан, һөйөклөм.
Өҙмә нескә ебен өмөттөң -
Ышаныcың менән бөйөкмөн.

Намыҫымды ергә тапама,
Хистәремдән аша атлама,
Күңелеңдә шөбһә һаҡлама -
Һөйөү шулай ғына аҡлана.

Йәшәтәлер беҙҙе ышаныс -
Тормош юлдарында таяныс,
Фани донъяларҙа йыуаныс;
Ышаныcһыҙ ғүмер аяныс.

## Изгелек һәм яуызлыҡ

Ит изгелек, көт яуызлыҡ, тиҙәр,
Яуызлыҡты һис кем көтмәйҙер.
Яҡшылыҡтар эшләп, һыуға һалһаң,
Эҙһеҙ-юйһеҙ ағып китмәйҙер.

Халыҡ белмәһә лә, балыҡ белер:
Аш аҡҡанға атма ташгарың -
Изгелектәр урап ҡайтҡан кеүек,
Ҡарғыштарҙан сыҡмаҫ баштарың...



## Һуңғы һынау

Ғүмер юлдарымда Хоҙай һине
Һуңғы һынау итеп биргәндер.
Шуны үткәс кенә, әхирәткә
Сират етер һиңә, тигәндер.

Фәрештәнең амин тигәнендә
Беҙ ҡауышҡан булһаҡ әгәр ҙә,
Мин ҡушҡуллап риза булыр инем
Яҙмыш ҡушҡан халәл гәмәлгә.

Изгелектең иге-сиге булмай,
Ул — мәңгелек күңел торошо.
Уйҙарымда хилаф ниәт түгел,
Тик аңларға һине тырыштым.

Беләм: изгеләрҙән түгелмен мин -
Бер тамсы нур бирә алманым.
Бер-беребеҙҙең беҙ һыңары түгел,
Мин бары тик шуны аңланым.
Кисер мине!

## Көҙгө уйҙар

Май айҙарын һағындырҙы, тиһең,
Май айҙары кире ҡайтырмы?
Ҡайтыр, әгәр май кисендәй йомшаҡ
Өтөп алһа битте ҡайнар тын;

Таң йондоҙо нуры һибелгәндәй,
Күҙҙәрендән һөйөү ағылһа,
Һандутастар һайрауындай сихри
Һүҙҙәр йөрәгемә ҡағылһа.

... Көҙгө ямғыр бәрә тәҙрәләргә,
Гүйә, күҙ йәштәре ағыла.
Май айҙары менән йәшәйбеҙ беҙ.
Ҡайтыр микән улар тағы ла?

Көҙгө әсе елдәр өҙөп-йолҡоп,
Һары япраҡтарҙы киптерә.
Бәлки, шул япраҡтар менән бергә
Һағыштарым осоп китерҙәр.

## Ҡайындар

Туя алмай нурға ирҡаләнә
Ҡышын өҙләгешкән ҡайындар, –
Гүйә, йәне-тәне наҙға сарсап,
Яңғыҙлыҡтан биҙгән ҡатындар.

Иңдәренән аҡ шәлдәрен ташлап,
Күкрәк киреп ала һулышын.
Түҙер генә әмәл ҡалмағастың,
Бөрөләре тиртә тулышып.

Татлы ләззәттәргә сумған ҡайын,
Күҙ сағыла һөйөү нурынан.



Һоҡландырып бар(ы)һын,
ымһындырып,
Япраҡтары тортә моронон.

Серле шыбырҙайҙар шул ҡайындар –
Гүзәллектең шинмәҫ асылы:
«Йәшәйештең фани донъяларҙа
Мөхәббәттә һүнмәҫ асылы».

## Йөрәгем әле лә әсенә

Усаҡта ҡуҙҙарҙы болғаттым...
Осҡондар йондоҙҙай сәселә.
Тик ялҡын янырмы яңынан,
Ҡып-ҡыҙыл ҡәнәфер сәскәләй?

Тағы яҙ...
Боҙҙарҙан йылғалар
Ярһына-ярһына әрселә.
Йөрәктә һыҙлауҙы ҡуҙғалтып,
Төштәргә керәһең әле лә...

Әйтерһең, ярыла шул боҙҙар –
Өмөттәр тарҡала, йәнселә!..
Һөйгәнем янымда,
ә шулай
Йөрәгем әле лә әсенә?

Яңғ(ы)ратып тауҙарҙы артылып,
Ҡайҙарға аҡбуҙат ай елә?
Әллә ҡуҙ, әллә боҙ, әллә буҙ –
Дөп-дөп-дөп... йөрәгем сәпсенә.

## Бәхетем

Тәүге мөхәббәтем бит һин минең –
Хоҙай беҙгә пар булырға ҡушҡан.
Тыңламаныҡ ниңә Тәңребеҙҙе –
Ғүмеребеҙ үтте кеүек бушҡа.

Нисә тапҡыр ут эсендә ҡалдым,
Нисә тапҡыр тәрән упҡын упты!
Хоҙайымдан бәхет һорағайным,
Ул бит мине үҙе килеп тапты.

Ярҙарынан ашҡан бәхеттәрем:
Һөйөп һине һис тә туймайымсы.
Оҙаҡ көтөп алған мөхәббәтем –
Күҙҙәр генә тейеп ҡуймаһынсы.

Үкенестәр өтә, эй, йөрәкте,
Һинһеҙ үткән көндәр өсөн көйөү.
Әремле бал тәме кеүек, гүйә,
Татлы ла был, ғазаплы ла һөйөү.

Рәхмәт һиңә, оҙаҡ көткән ишем, –
Яң(ы)нан тыуҙым, яң(ы)нан йәшәрҙем!
Юғалтмайыҡ башҡа бәхеткәйҙе,
Селпәрәмә килгән саф гәлсәрҙәй.



## Ҡасыу

Тормош бара, тормош ҡайнай тирә-яҡта,
Тик барыһы минән ситтә, минән башҡа.
Рәнйетһәләр мине тағы бинахаҡҡа,
Күрмәйем дә ишетмәйем мин был хаҡта.

Башты тыҡҡанмын да ҡомға дөйәғоштай,
Көнгә баҡмайым мин хәҙер көнбағыштай.
Йөрәгем дә ҡатҡан инде суйырташтай,
Күңелемдә тора йоҙаҡ ат башындай.

Йән биргәнгә йүн бирер, ти, әммә Хоҙай.
Ярамай бит!.. Етер инде йәшәү былай!
Сыҡмаһа ла йәнем, мин үлгәнмен, мин юҡ,
Терелтергә атылһасы миңә бер уҡ.

## Ҡушбүләгем

Уйсан тал-тирәктәр араһында
Һәүетемсә аға Ҡушбүләк.
Һил йылғаның йәмле ярҙарында
Ҡушылғайны ике йәш йөрәк.

Ҡушбүләгем, шаһит һин булғайның
Гәлсәрҙәй саф ысын һөйөүгә.
Тик белмәнең ҡайнар шул тойғонон
Бер ҡалырын янып-көйөүгә.

Ҡушбүләгем, йәшлек йылғам минең,
Кире аҡһаң ине – үтенәм.
Айлы кистәр ярҙарында һинең
Кире ҡайтмай инде – үкенәм.

## Һин китәһең

Аҡ болоттоң ҡуҙғалғыһы килмәй,
Йәшел ебәк ергә һоҡлана.
Гөлдәр еткләшеп сайҡалалар,
Көлгән булып ерле юҡҡа ла.

Наҙлы елдәр туҡтап бейеп тора,
Һырылышып тауҙар биленә.
Күтәрелә күккә ике тургай,
Айырылабыҙ нигә беҙ генә?

Башын башҡа терәп, аҡ ҡайындар
Уртаҡлаша йөрәк серҙәрен.
Ебәргеһе килмәй һине, хас мин,
Йыраҡтарға тыуған ерҙәрен...

Бар гүзәллек бер миҙгеллек түгел,
Тағы килер улар, килерҙәр,
Минең менән бергә моңайырҙар,
Минең менән тағы көлөрҙәр.

## Һин дә мин

Мин:
– Юҡ беҙҙең уртаҡ бер нәмәбеҙ:
Ни малыбыҙ, ни балабыҙ, ни өйөбөҙ...

Һин:
– Ин ҙур уртаҡ байлығыбыҙ –
Мөхәббәт түгелме ни?



Шул әҙме ни?
Шунан да олораҡ бәхет
Булыуы мөмкинме ни?

Беҙ:
– Ундай ҙур бәхет тәтейҙер
Һирәктәргә генә.
Һин дә мин йәшәп ятабыҙ
Сөкөрҙәшеп кенә.

## Һуңғы сәскәләр

Тәбиғәт тә ҡайһы ваҡыт яңылыша;
Миҙгелләрҙе бутап ҡуя – аймылыша.
Ҡарасале, ҡарасайҙа урмандарҙа
Өр-яңынан сәскә ата ҡыңғырауҙар.
Яҙ еткән, тип уйлай микән ул бахырҙар;
Ҡырау һуҡһа, ҡурышалар бит ахырҙа.
Емеш бирмәй, орлоҡ сәсмәй үтә көндәр –
Тик йәм өсөн генә, ахры, тыуған гөлдәр.
Был – матурлыҡ, был – батырлыҡ, һис бәхәсһеҙ;
Ҡыҫҡа ғүмер, әммә түгел ул бәхетһеҙ!
...Һөйөүебеҙ, әйтерһең дә, көҙ биҙәге:
Сәскә ата, үтһә лә бит йәй миҙгеле,
Ҡурҡып тормай ел-ямғырҙан, сал ҡырауҙан.
Һин бит миңә бүләк иттең ҡыңғырауҙар,
Һин бит миңә бүләк иттең ҡыңғырауҙар...

## Һөйөү усағы

Сәйләп-сәйләп көндәребеҙ үтеп,
Бәйләп-бәйләп йылдар теҙелде.
Араларҙа ни ғүмерҙәр ята –
Һөйөү усағыбыҙ терелде.

Кире булмаһа ла, әй, ҡайтарып
Үлеп ғашиҡ булған мәлдәрҙе.
Мин һаман да һөйөм һине шашып,
Көтәм һүндермәйсә шәмдәрҙе.

Ҡабыҙҙың да тағы һин ҡуҙҙарҙы,
Һөйөү уты дөрләй усаҡта.
Һуңғы һулышҡаса янһам ине
Һинең ҡайнар ғәзиз ҡосаҡта.

Кем ғәйепле – был бит мөһим түгел,
Беҙ барыбер хәҙер бергәбеҙ.
Сәйләп-сәйләп ҡалған да көндәрҙе
Икәүләшеп кенә теҙәбеҙ.

## Икәүләшеп балан тирәбеҙ

Икәүләшеп балан тирәбеҙ,
Татлы ла һуң әсе емештәр.
Ғүмер буйы бергә кеүекбеҙ,
Айырылманыҡ бер ҙә, имештер.



Икәүләшеп балан тирәбеҙ,
Теҙелешә сағыу емештәр.
Ғүмер һуңын бергә үтәбеҙ,
Әсе һөйөү беҙгә килеште.

Икәүләшеп балан тирәбеҙ,
Ҡышҡылыҡҡа әҙер емештәр.
Сәсебеҙгә ҡырау төшһә лә,
Һаман да йәй әле, имештер…



## Яуын

Ҡарлуғасҡай ҡыйып төпәш осһа,
Була торғайны ул яуынға.
Яҡшылыҡҡа ғына юрайыҡсы,
Ауыр уйҙар баҫһа яурынға.

Ҡыялатып ҡына яуын яуа,
Ел өргәнгә шулай ҡыялыр.
Бер башыма төшкән моң-һағыштар
Күкрәгемә нисек һыялыр?

Күкте ярып дөмбөрҙәгән күкрәү
Күңелдәргә шомдар һалалыр.
Ялағайҙай ялтлап үткән ғүмер
Хәтерҙәрҙә уйылып ҡалалыр.

Яуын яуып, болот таралдыһа,
Ҡояш ала алтын тарағын.
Һөйөп кенә миңә ҡараниһәң,
Шик-шөбһәләр китә таралып.

## Алтын ҡайын

Алтын ҡайын, алтынҡайым,
Үҙ иткәнсе көҙ айын:
Һуңғы сыуаҡ нурҙарына
Иркәләнә, моғайын.



Япраҡтарын оҙаҡ ҡоймай,
Әй, балҡый һаман ҡайын!
Иртә-кисен һоҡланамын,
Ҡарашым төшкән һайын.

Йәшел түгел, аҡ та түгел,
Алтын минең ҡайыным.
…Һөйөүемдә нурға мансып,
Йөрәгемә ҡайыным.

## Хыялым

Хыялдағы йөрем – тоғро йәнем,
Ул ташламай мине, ташламай.
Хыянаттың белмәй ни икәнен,
Яңы һөйөү ситтә башламай.

Беҙ бит икәү бергә бер бөтөн,
Айырмаһын беҙҙе һис бер кем.
Сит күҙҙәрҙән, Тәңрем, әй, һакла!
Ҡараймаһын күңел, гел аҡла.

Таҙа күңел, тоғро йөрәк – бүләк,
Булмышымды ярат шул көйгә.
Ҡайнар һөйөү менән һәр күҙәнәк
Яуап бирер ихлас һөйөүгә.

Ҡалмайым мин һинән, ҡалмайым,
Мөхәббәтһеҙ йәшәй алмайым.
Һөйөү тажын мәңге һалмайым,
Иренеңә әҙер бал-майым.

Һин бар, һин эргәмдә – мин тоям,
Шул тойғонан аҡылымды юям.
Күҙ алдымда тора яҡты һының,
Иреңә күңелде йылы тының.

Хыялым, һин минең, хыялым,
Әй рухташым, игеҙ гиҙялым!
Киткәндә лә теге донъяға
Алырһың бит мине янына?



## Саф тамсылар

Саф тамсылар төшә күктән,
Гәүһәрҙәй балҡып яуа.
Әйтерһең дә, улар ерҙән
Бар ҡайғыларҙы йыуа.

Тып та тып тама тамсылар,
Шатлыҡ бөркөй йөҙҙәрҙән.
Тамһа тамһын улар күктән,
Таммаһындар күҙҙәрҙән.

1972 йыл.

## Ҡайтайыҡсы, әйҙә, ауылға

Теҙелешкән ҡала урамында
Һоро йорттар – «шырпы ҡаптары».
Шулай тиеп нарыҡлайҙар ине,
Яратмайса, ауыл ҡарттары.

Инде беҙ ҙә олоғайҙыҡ хәҙер...
Фатир – төрмә : тыным тарыға!
Сәхраләрҙе юҡһынамын, ерҙе –
Ҡайтайыҡсы, әйҙә, ауылға.

Беҙ – ер кешеһе шул.
Ҡала халҡы,
Алмағыҙсы, зинһар, ауырға.
Нишләтәһең, тыуған тупраҡ тарта –
Йығылайым ҡайтып ауылға.

Үҫмер саҡтар ауылдарҙа үтте,
Йәшлегебеҙ китте ҡалаға.
Мин барыбер һиңә хеҙмәт иттем –
Рәнйемәсе, ауыл, балаңа.

Ҡайтам! Ҡайтам!
Емерелгән йорт та
Хан һарайы һымаҡ күренә.
Зыяратында атам-әсәм ята,
Минә лә ал, ерем, үҙеңә.

## Ҡышҡы урман

Ап-аҡ бөҫтәр ҡунып ағастарға,
Ем-ем итә нурҙы бәллүрҙәй.
Ауырайған шыршы ботаҡтары
Елдәр иҫкәндә лә бәүелмәй.

Гәләр алҡалары ҡайындарҙың
Сың-сың килә көмөш тынлыҡта;
Иңдәренә һалып семәрле шәл,
Аҡлашалар кеүек ымлап та.

Ҡышҡы урман! Әкиәти донъя,
Мөғжизәләр иле һин әле
Тағы ҡайҙа шундай гүзәллек бар,
Ниндәй яҡтар һиңә тиң әле?

Алыштырмам Башҡортостанымды
Океанға, сүлгә, вулканға.
Берәһен дә күргем килеп тормай,
Һөйөнөмөн тик ул булғанға!

Яҙы, йәйе, көҙө – барыһы үҙ,
Һалҡын ҡышы ла бит түҙерлек.
Йәмле ерҙәр эҙләп йөрөмә лә,
Ожмах үҙе ошо түгелме?!





## Васыят

Беҙ киткәндән донъя түңкәрелмәҫ,
Туфан ҡалҡмаҫ, Ҡояш тотолмаҫ.
Тик рухыбыҙ ғына һүрелмәһен –
Фәҡәт шунда халҡым отолмаҫ.

Быуат үтә... илдәр, телдәр бөтә,
Ер ҙә ҡалып бара ҡураныс...
Беҙҙең шиғырҙарҙы кемдәр уҡыр,
Кемдәр аңлар – шуныһы ҡыҙғаныс.

Өйрәт, балам, ул-ҡыҙыңа телде,
Индер аңдарына иманды.
Уҡырһығыҙ әле бер саҡ, тиеп,
Ҡалдырамын һеҙгә яҙмамды.

## Ҡарт алаша

Ҡарт алаша тора башын эйеп...
Ниҙәр уйлай икән бахырым?
Йәш саҡтарын, бәлки, йәш саптарын
Һағынып иҫкә ала, ахырыһы.

Заманында күп ектеләр инде,
Хәлгенәһе бөткән шуға ла.
Кәрәкмәй ул хәҙер бер кемгә лә,
Тормош уны күптән туғарған.

Бәйгеләрҙә ул бит уҙышманы,
Бар белгәне – ауыр йөк тартты.
Йөк атына ни һан? Күрмәйҙәр ҙә...
Ҡартайтты шул инде, ҡартайтты.

Ҡарт алаша тора башын эйеп…
Күҙҙәренә йәштәр эркелгән.
Алға бармай – ғүмер юлы уның
Бер тупыҡҡа килеп төртөлгән.

## Тере шишмәләр

*Баязит Бикбайға*

«Тере шишмәнең бер тамсыһы» һин,
Ергә йотолоп, һеңеп ҡалманың.
Тере шишмә һаман урғып аға,
Һин дә, Бикбай, онотолманың.

Ташты ярып сыҡҡан Ерек кеүек,
Тынмайынса ағып яталыр.
Диңгеҙҙәргә барып ҡоялыр ҙа
Ямғыр булып кире ҡайталыр.

Кешеләргә күпме шатлыҡ биргән,
Йән-тән сихәтлеге ташыған.
Гүзәл тәбиғәткә сикһеҙ һөйөү
Шул шишмәнән иһә башланған.

«Ер, һыу – бөтә башланғыстың башы,
Унан башҡа кеше үҙе юҡ»,
Һин үҙең бит беҙҙең шишмә башы,
Һис тә ҡоромаҫ бер сығанаҡ.

Мәңге хәрәкәттә, мәңге йәшәй,
Булмай уны бер ҙә туҡтатып.



Нәҫел-ырыуыңдың тармаҡтарын
Шишмәләргә, белеп, оҡшаттың.

Рәхмәтлелер һиңә һәр бер йылға,
Хатта кескәй генә инеш тә.
Тамсылары ҡалһын саф көйөнсә,
Улар бөйөк тамсы килеш тә.

***

Аҡ ҡыш әле – тышта февраль айы,
Ә ҡояшы ныҡыраҡ яҡтырта.
Ай-һай, һайрай ҙа һун буҙ турғайы!
Тимәк, көндәр инде яҙға тарта.

Минең тыуған көндә, буранайҙа,
Була торғайнысы бурандары.
Әле еле лә юҡ, салт аяҙ ҙа,
Нурға сумған ҡала урамдары.

Барыһы ла яҙҙы көтә, беләм:
Инде ялҡытҡандар оҙон төндәр.
Ҡараңғылыҡ артта ҡалды, һиҙәм:
Алда минең гелән яҡты көндәр.

Ҡышты сыҡтыҡ имен-аман тағы,
Яҙ, йәй, көҙ ҙә үтһен исәнлектә.
Һәр көн өсөн ҡылайыҡ та доға,
Онотмайыҡ фани икәнлекте.

## Ришүәтсе ханыма бер кәлимә бағышлау һүҙе

Кемдәрҙе генә тәнҡитләп,
Бағышлауҙар яҙмайһың.
Ә үҙен бит бер ҡайҙа ла
Ришүәтһеҙ бармайһың.

Ришүәт биргәс, китаптарың
Бер-бер артлы баҫылды.
Ришүәт бирҙең, түрәлегең
Тик оҙаҡҡа бармаһы.

Ришүәт биреп, яҙыусыларҙың
Союзына ла индең.
Ришүәт биреп, үҙең теләгән
Премия эләктерҙең.

Башҡаларҙы яманлауың
Көнләшеүҙәнлер инде.
Ришүәт биреп, билдәлелек
Ала алмаҫһың инде.

Кем кемгә нимәһен бирә –
Унда ни эшем бар һуң?
Әрнейе йөрәк: ғәзелдәргә
Юлдар ябыҡ ҡала шул.



## Ҡояш менән ай

(поэма)

**Һөйөклө әсәйем Шәмсеҡәмәр Ғибаҙулла ҡыҙы Ғәлиәкбароваға бағышлайым**

*Шәмшәрифкәй тигән ҡалаларҙа*
*Кис әкиәмһеҙ ҡапҡа ябылмай.*
*Үткән дә генә ғүмер, ҡалған хәтер,*
*Эҙләһәң дә ҡабат табылмай.*

(Халыҡ йырынан.)

Ҡояш сыға,
Һыҙылып ал таң ата,
Алтын нурҙар ергә һибелә,
Әйтерһең дә, әсәкәйем ҡайта –
Күңелемә шулай һиҙелә.
Ул ерҙәрҙән кире ҡайтмайҙар шул...
Ҡояш булып ҡалҡа ҡәҙерлем.
Мин үҙем бит һинең янарыңа
Барыр өсөн күптән әҙермен.

### I бүлек

– Ҡарағыҙсы, әйкәйем дә,
Шәмсеҡәмәрҙең* йөҙө:
Үҙе теген, сигеп кейгән
Алъяпҡысыңдай төҫө.

* Шәмсеҡәмәр – ғәрәпсәнән «ҡояш» + «ай».

Ауылдаштар араһында
Йөрөнө шундайын һүҙ.
Ап-аҡ битҭә сөм-ҡара ҡаш,
Ҡамыш керпек, йондоҙ күҙ.
Оҙон ҡара толомдарын
Бейек түшенә һалып,
Үттениһә урам буйлап,
Ҡалалар хайран ҡалып.
Аулаҡ өйҙә уйындарҙа
Үҙе таҡмаҡ сығара.
Хәс тә артис, эй, көлдөрә –
Кеше булып ҡылана.
Егеттәрҙең күҙе төшә,
Бора ла һоратҡанын
Шәмсекәмәр ҡаршы төшә:
– Мин бит ирҙән ҡайтҡанмын...
...Ҡыҙҙы ун биш йәшенән үк
Кейәүгә бирҙеләр шул –
Уҫал үгәй әсәй өсөн
Артыҡ тамаҡ ине ул.
Мотал ауылына төшкәс,
Енел тормош көтмәне.
Ире насар булмаһа ла,
Ҡәйнәһе үҙ итмәне.
Ҡыҙ зерә лә йыуаш ине,
Барыһы йәберләне.
Өс йәштән йәтим ҡалғастың,
Кем уны ҡәҙерләһен?
Ярай әле ағайҙары



Яҡын күреп яҡлашты.
Ҡаҡ һөйәккә ҡалған ҡыҙҙы
Кире барып алҡайтты:
– Әле беҙ ҙә өйләнмәгән,
Йәп-йәш кенә баланы
Ниңә ситкә тибәһегеҙ,
Һылыуһыҙ ҡалайыҡмы?..
...Үгәй әсәй күп күрһәтмәй,
Ҡайҙа барһын ҡыҙ бала?
Ғәли исемле егеткә
Тағы кейәүгә бара.
(Ауылында моряк Ғәли
Ҡыҙҙарҙың һушын алды,
Тик сибәр гармунсы егет
Ҡамәргә ғашиҡ булды.)
Ауылда кескәй өй һалып,
Ғаилә донъя көттө.
Тупылдатып ике малай
Иренә бүләк итте.
Колхозсылар ыңғайына
Йәштәр ал-ял белмәне:
«Трудодень» таяҡтарына
Ең һыҙғанып эшләне.

## II бүлек

Шулай гөрләр ине тормош,
Һуғыш сыҡмаһа әгәр.
(Донъяны емергән өсөн,
Германды һуҡһын ҡәһәр!)

Ҡансыралар оҙаттылар
Фронтҡа ир-егетен.
Ғәли йөрәкһен хушлашты,
Ҡосоп хәләл ефетен:
– Бармаҡ менән дә сиртмәнем
Үҙ ғүмеремдә һиңә.
Бәхил бул, Шәмсекәмәрем,
Рәнйеп ҡалмасы миңә.
Көнләшеүсен көнләштем дә,
Бәлки, ныҡ яратҡанға...
Һиңә һуңғы үтенесем:
Малайҙарымды һаҡла!
...Шул китеүҙән юҡ булды ул,
Тәҡдир яҙғандыр инде:
«Хәбәрһеҙ юғалды» тигән
Ҡағыҙы ғына килде.
Йөклө ҡалған Шәмсекәмәр
Ҡыҙын яңғыҙы тапты.
Һалҡын тейгән сабыйҡайын
Күп тә үтмәй юғалтты.
Ике малайы бар әле –
Терәге-таянысы:
Ғәйнулла менән Закиры –
Өмөтө-ышанысы.
Ун йәштәрҙә оло улы,
Үҙен-үҙе ҡарарлыҡ:
Яландан йыя үләнен,
Тамағына ярарлыҡ:
Балтырғаны, ҡуҙғалағы,



Йыуаһы, һарынаһы.
Ҡымыҙлыҡ, ҡуян тубығы –
Барыһы ла ашарлыҡ.
Ярай әле колхозында
Ысталауай астылар.
Балаларға көнөнә бер
Шыйыҡ аш ашаттылар.
Кемдәр аҡтан өҙөлмәгән,
Әсе ҡатыҡ килтерә.
Ярлы-ябаға балаһы
Эсен генә күптерә.
Биш йәшлек Закир аҡыллы –
Әсәһен йәлләй өҙ(ө)лөп:
Әҙ-маҙ өләш алып ҡайта,
Үҙ ауыҙынан өҙөп.
Тик бала күп торманы шул –
Аслыҡтан һәләк булды.
Шешенгән ҡатыңды тутан –
Ҡорбан үҙенә алды.
Шулай итеп тере ҡалды
Әсә һәм ул...
Эй замана!
Хатта бүреләр аслыҡтан
Ауылға яҡынланы.
Буран ологан бер төндә
Солаңда торған кәзә
Баҡырғанға яр һалып,
Шәмсекәмәр уяныл,
Көйәнтә менән домбаҫләп,

Саҡырылмаған «ҡунаҡты»
Саҡ-саҡ сығарҙы ҡыуып.
Бүреһенә түҙер инең...
Ҡайғы артынан ҡайғы:
Ике ағай ҡайта алмай
Һуғышта ятып ҡалды.
Ниғәмәтулла Фәйзулланы
Үҙ ҡулы менән күмде,
Үс ҡандырып, күпме немес
Уның ҡулынан үлде!
...Өлө ағаһы иҫән дә,
Яман уҫал еңгәһе.
Ҡышын ҡар ҙа бирмәҫ ине –
Уға көнөң төшмәһен!
Колхоз етәксеһе, бәлки,
Ярҙам итеп ебәрер.
Бал да май эсендә йөҙә,
Кеше хәленә инер?
Берсиҙәтел тол ҡатындың
Бер көн ҡылын да тартты:
Төнгө ҡарауылда саҡта
Түшәк бүлешеү – шарты.
Асҡа үлһә үлер ине,
Ҡатын риза булманы.
Көн-төн колхозда эшләне –
Тамаҡ ашҡа туйманы.
Ойоҡбаштар, бейәләйҙәр
Яугирҙарға бәйләйҙәр.
Ашлығын да, ит-майын да



Фронтҡа әҙерләйҙәр.
Хөкүмәткә тапшырғандан
«Артып» ҡала ништәптер.
Түрә-ҡара байый бара,
Йәтимдәрҙе эшләтеп.
Ир балалар ер һөрәләр,
Сәсәләр, тырматалар.
Шәмсекәмәрҙең улын да
Баҫыуға сығарталар...

### III бүлек

Һуғыш бөттө!
Нисә бөртөк
Ир-ат әйләнеп ҡайтты?
Ҡансырала тормош яйлап
Үҙ һуҡмағына ятты.
Колхоз бирҙе эшләгәнгә
Ашлығын хатта тоҡ-тоҡ.
Бәрәңгеһен дә сәстеләр,
Бар ине кәзә-һарыҡ.
Инде Ғәйнулла ла үҫеп,
Егет ҡороно етте.
Йәше тулмаҫ та, өс йылға
Хеҙмәт итергә китте.
...Яңғыҙлыҡ...
Хоҙай яҙмаһын
Йәш көйө тол ҡалырға.
Шәмсекәмәр йырлай ине
Күңелен бушатырға:

*– Йәнкәй-әнәш китте, ай, һунарға,*
*Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә.*
*Шәшкеләргә китеп вафат булғас,*
*Башҡынайым ҡалды йәш кенә...*
«Ашҡаҙар», «Сәлимәкәй»ҙе,
«Уйыл»ды ла ул һуҙҙы.
Илай-илай тыңланылар
Ауылдаштары ҡыҙҙы.
Ҡат-ҡат һорап йырлаттылар
Мәжлестәрҙә, клубта.
Барыһынан да уҙҙыра,
Тома наҙан булып та.
Йәтим бала моңло була –
Был һәр кемгә билдәле.
Моңло булмаһа нишләһен:
Бәхетһеҙ ҙә бит әле...
Зәйнәп Биишева кеүек,
Уҡыған булһа тимен,
Яҙыусы, йә актриса,
Йә йырсы булыр ине.
Йырҙарҙы үҙе сығарып
Йырлау уға нимә ул!
Ә күпме әкиәт, бәйет,
Йомаҡ, мәҡәл белә ул!
Уҡыу тәтемәне ҡыҙға –
Ауылда мулла хужа:
Балаларҙы аҙҙыра, тип,
Мөғәллимде ҡыуҙыра.
Әлепте таяҡ тип белмәй,



Яңы хәреф танымай.
Уҡый-яҙа белмәһә лә,
Моңо йөрәккә һыймай!

## IV бүлек

Сиған ҡатыны әйткәйне,
Ике ҡыҙың булыр, тип.
Шулар һинең бәхетең дә,
Йыуанысың булыр, тип...
...Улын күтәреп,тыныс ҡына
Йәшәп ятҡан сағында,
Күрше ауылдан бер ирекәй
Бисәлеккә саҡыра.
Яңғыҙлыҡ үҙәккә үткән,
Йәше лә уҙып бара –
Риза булды ла ҡуйҙы.
Яҙмыштыр... Эй, бисара!
Нинди әҙәм? Йүнлеме һуң?
Балалары бар микән? –
Бер нәмә лә һорашманы...
Күрәһеләр бар икән!
Зариф атлы бер тол яуғир –
Һораҡан ир тигәне.
Төнөн килеп, «Беларусь»ка
Бар мөлкәтен тейәне.
Йә Хоҙайым! Был ирҙең бит
Дүрт балаһы бар икән!
Ашарҙарына бер ни юҡ –

Өй эсе тәкыр икән...
Нахаҡҡа ғәйепләнеп, ир
Төрмәлә лә ултырған,
Сталин үлгәндән һуң ғына
Өйләнеп ҡайтҡан булған.
Күпте күргән! Өҫтәүенә,
Ҡатыны вафат булған.
Әҙерәк төшөрөп алһа,
Ҡайғылары баҫылған.
Тик холҡо ныҡ үҙгәргән шул:
Иҫерә лә болара,
Ҡатынына ҡул күтәрә –
Бар, уны тыйып ҡара!
Йыуаш Шәмсеҡәмәр өсөн
Былай тормош – тамуҡ бит!
Үгәй әсәй төрлө була –
Аңлаған кеше юҡ бит...
Улдары – үҫмер егеттәр
Ҡабул итмәй әсәне,
Үҙ аллы тормош башлайҙар,
Атай ҡартҡа үсегеп.
Уи йәшлек һеңлеләрен дә
Алып сығып китәләр.
Тормош бит... Йәшәргә кәрәк,
Инде ни хәл итәһең?
«Кешегә ай менән ҡояш
Хатта ярамағанды,
Мин генә ярамам инде –
Әҙәм заты булғанмын.»



Шәмсеҡәмәр бер-бер артлы
Ике ҡыҙ бала тапты.
Ул арала олө улы
Әрменән урап ҡайтты.
Ғәйнулла үпкәләһә лә
Әсәһе көтмәгәнгә,
Һылыуҙарын бик ярatты
Килеп китканлдарендә.
Йыуаштан йыуаш тыуалыр:
Тыныс, аҡыллы ине.
Мейес сығарыусы булды,
Бар халыҡ хөрмәт итте.
Тик ҡатындан уңмағастын,
Үҙ-үҙенә ҡул һалды.
Яһил бисә һәләк итте,
Өс бала йәтим ҡалды...
– Ниңә һин бәхетһеҙ итеп
Тыуҙырҙың, әсәй, мине? –
Һуңғы килгәнендә улы
Әсенеп шулай тине.
Шәмсеҡәмәр һығылып төштө:
– Аслыҡ йылында ҡалған
Балам үлеп ятһынсәле –
Ышанмайым, юҡ, ялған!..

## V бүлек

Шәмсеҡәмәрҙең ҡыҙҙары
Үҫеп буй ҙа еттеләр,

Ҡул араһына кергәләр –
Өйҙә ярҙам итәләр.
Эпләнеп үҫтеләр иңде:
Етешһеҙлек, ауыр эш –
Уң йәштән бесән саптылар;
Күҙ етһә, ырҙынға төш!
Совхоз сөгөлдөрөн утау,
Йортта картуф үҫтереү,
Ырҙында иген таҙартыу,
Бесән сабып килтереү,
Көйәнтәләп һыу ташыу ҙа –
Уларҙың елкәһендә.
Бар мәшәҡәт шулай итеп
Сибек ҡыҙҙар иңендә.
Тиҫтер малайҙар бит әле
Йөрөй уйнап урамда,
Ә Зарифтың «малайҙары»
Агас ҡырҡа урманда...
Шәмсекәмәр ҡайтып китә,
Ике ҡыҙын етәкләп.
Өйөндә башҡалар тора,
Кире килә йәйәүләп.
Оло ҡыҙы бер сак әйтте,
Атаһы боларғанда:
«Әсәй, ниңә уға сыҡтың ?!»
Көлдө ул тыйнаҡ ҡына:
«Уға мин килмәһәм әгәр,
Һеҙ булмаç инегеҙ бит...»
Эй җ΄мыш!



Был – йәшәү ҡануны,
Тормош асылы шул бит.
Ҡыҙҙар үҙ-ара ыҙғышһа,
«Сак-суҡ» бәйетен көйләр;
Һағышырһығыҙ әле, тип
Үҙенсә тәрбиәләр...
Сирле атай ҙа йығылды—
«Китте» лугир, торманы.
Шәмсәкәмәр тағы яңғыҙ...
Әлдә бар был ҡыҙҙары.
Ҡыҙҙарҙың бит үҙ юлдары:
Уҡыу – бар хыялдары!
Ҡалаға китеп барҙылар,
Әсәләрен ҡалдырып.
Әсә күңеле – балала, тик
Бала күңеле – далала.
Көтә-көтә көтөк булды,
Ҡыҙҙар һаман ҡалала...
Сит яҡтарҙа ике ҡыҙы
Үҙ тормошон ҡорҙолар.
Ейән-ейәнсәрҙәр менән
Ҡайтҡылап та торҙолар.
Шәмсекәмәр һүнә бара:
Байый уның ҡояшы.
Айы ла ҡайҙалыр булған –
Эйәрсәне, юлдашы...

***

Ҡояш бата,
Инде Ай ҙа ҡалҡа.
Эргәһендә йондоҙ күренә...
Бер бите – ай, ә бер бите – ҡояш
Әсәкәйем йәннәт түрендә.
Ҡояш байыниһа, Айы сыға –
Ғаләм ғәмәлдәре үтәлә:
Килер быуындары тыуа тора,
Ерҙә йәшәү дауам ителә.





## Урғый шишмәм

Бейек текә ҡыҙыл яр аҫтынан, ҙур-ҙур таштарҙы тишә-тишә, сылтыр-сылтыр килеп урғый бер шишмә. Уның көмөштәй саф, теште ҡамаштырырҙай һалҡын һыуы бар тәбиғәткә йән өрөп, бар тере-йәнгә йәм биреп аға ла аға. Таштар аҫтынан ашҡынып сығып, алҡынып әҡканғалыр инде, уны Ташҡойо тип йөрөтәләр. Ҡайҙан ул көс таба икән тәрән ер аҫтынан, ауыр тау-таш араһынан яҡты донъяға урғылып сығырға? Уны бит бер кем дә, бер нәмә лә туҡтата алмай.

Дөрөҫ, бер заман күпер төҙөйбөҙ тип, йылғаны быуҙылар, һәм ул ҡәҙимге ярҙарынан ашып, Ташҡойоно ла баҫып китте. Шишмә бысраҡ һыу аҫтында тороп ҡалды, ләкин ул туҡталманы, балаларҙың күҙ йәшендәй саф һыуҙарын йылғаға ағыҙа бирҙе. Тик уның гәүһәр-яҡуттай тамсылары элеккесә ҡояш нурҙарында төрлө төҫкә инеп емелдәмәй, көмөш тәңкәләрҙәй яңғырауыҡлы тауышы тирә-яҡҡа ишетелерлек сылтырап йырламай ине. Ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарған ағайҙарға үпкәһе ҙур ине шишмәнең ул саҡта. Әллә был тотҡонлоғо оҙаҡҡа һуҙылманы уның — ер йөҙөндә яҡшылыҡ барыбер еңә шул. Бына ул тағы элекке гүзәллегенә кире ҡайтып, гүйә, яңынан йәшәрҙе...

...Аллы-гөллө күлдәк кейгән ҡыҙҙар, көйәнтәләрен яурындарына һалып, нәҙекәй билдәрен һығылдыра-һығылдыра, һәр иртәлә шишмәгә һыуға килә. Күнәктәрен сайҡап, сүместәрен һыу урғылған яҡҡа ҡаратып (инәйҙәр шулай ҡуша торғайны), яйлап ҡына һыу алалар. Шунан, матур йырҙар көйләй-көйләй, ҡайтыу яғына мығайлайҙар. Уларҙың һыуҙан ҡайтҡанын егеттәр һоҡланып ҡарап ҡалалар. Ә ҡаршыға осраһалар, һыуҙарын тәмләп ҡарамай үткәрмәйҙәр.

Оҙон көн буйы шишмә тирәһе тынмай. Ҡушбүләк йылғаһы аша һалынған баҫмала ҡатын-ҡыҙҙар кер сайҡай, бала-саға һыу һибешеп сыр-сыу килә, өйрәк-ҡаҙҙар ирәйеп йөҙә...

Эйе, Ташҡойо үҙенең зәмзәмдәй һыуҙарын Ҡушбүләк йылғаһына ҡоя. Ниңә Ҡушбүләк тип аталды икән ул? Әллә йылға менән шишмә икеһе бергә кешеләргә Хоҙай биргән ҡуш бүләкме икән? Нисек кенә булмаһын, Ҡушбүләк үҙенең бейек ярынан урғылып сыҡҡан иҫәпһеҙ-һанһыҙ бәләкәй генә шишмәләрҙең таҙа һалҡын һыуҙарын Мәләүез йылғаһына алып барып ҡуша, ә Мәләүез — Ағиҙелгә. Шулай итеп, Ағиҙелдең аҡ һыуҙарында беҙҙең шишмәләрҙең дә саф тамсылары бар.

...Урғылып ятҡан Ташҡойоноң баш осонда ҡыҙыл таштар өйөлөп тора, ә тын ғына аҡҡан Ҡушбүләктең ҡаршылағы һөҙәк ярында бөҙрә таллар баштарын эйгән. Көндөҙ кеше аяғы өҙөлмәгән ярҙар төнөн тынып ҡала. Тик ғашиҡтар ғына талдарҙа бер



туҡтауһыҙ сутылдашҡан һандуғастар менән бергә һөйөшөп туя алмай таң аттыра...

Ә йылғаның буйынан-буйына һаҡсылар кеүек теҙелеп баҫҡан тирәктәр ниңәлер ҡороп һирәгәйгән. Йылға ситендә үҫкән шифалы андыҙ сәскәләре, ҡуш еҫле бөтнөк үләндәре лә юҡҡа сыҡҡан. Самауыр ҡайнаған арала сығып йыйып алып инә торған еләк тә күренмәй.

Йылға буйы тын... һыу алырға килеүсе юҡ. Хәҙер һыуҙы өй эсендәге крандан ғына ағыҙып алалар бит. Һандуғас тауышы урынына сит ил көйҙәрен тыңлайҙар.

Ә шишмә күңелле йырлап, һаман үҙенә саҡырып тора. Күпме кеше тыуған яғын һағынып ҡайтып, услап уның шифалы һыуын эскән. Беҙ бала саҡта өйҙән әпәкәй алып килеп, шишмә һыуына манып ашай торғайныҡ. Донъяла шунан тәмлерәк ризыҡ юҡ кеүек ине ул саҡта. Шишмәләрҙең һыуы шул тиклем һалҡын, йәйге селләлә тәнгә әйтеп бөтөргөһөҙ сихәт бирә. Ҡушбүләк һыуының ҡышын да туңмауы шул шишмәләрҙең һыуынандыр инде. Шишмәләр тим, сөнки Ташҡойо яңғыҙ түгел, уның эргәһендә кескәй бихисап исемһеҙ шишмәләр ер аҫтынан атылып сығалар ҙа, бер-береһе менән ярыша-ярыша, Ҡушбүләккә йүгерәләр.

Был шишмәләрҙе саҡ ҡына ҡарамай торһаң, уларға һыу менән бергә урғылып сыҡҡан ваҡ ҡырсынташ ҡом тула. Ялан аяҡлап кисеп йөрөп,

уларҙы таҙартыу һәм шишмәләрҙең йылғаға табан юлдарын асыу — беҙҙең яратҡан шөғөлөбөҙ ине.

Шишмә эргәһенән, ҡыҙыл таштарға баҫа-баҫа, өҫкә күтәрелһәң, күҙ алдында тауҙар хасил була. Алдағы һеҙәгерәген халыҡ Аҡморон тип йөрөтә, уның янында — Текәтау. Беҙ балаҡай саҡта улар бейек, текә булып күренә ине, ә хәҙер тәпәшәйеп ҡалғандай. Әллә тауҙар ҡартайып теҙ сүккән, әллә беҙ үҙебеҙ олоғайҙыҡ... Әммә тау башына менеп баҡһаң, бөтә тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренә. Был тауҙар араһында йыуа, күтәрсен күҙҙәре зәңгәр балаҫ түшәгәндәй йәйелеп ята торғайны. Мал йөрөтөүҙән хәҙер улар тап-таҡыр...

Аҡморондоң һөҙәк итәгенә, тирә-йүнден йәмен ебәреп, келәт төҙөп ҡуйҙылар (әйтерһең дә, башҡа урын бөткән). Унда баҫыуҙарҙа ҡулланыла торған ағыу һалалар ине. Һәм ул ағыулы келәт шифалы саф шишмәнең баш осонда ғына ултыра. Ә бит уның тирә-яғына түгелгән ағыу ямғыр һыуҙары менән йыуылып аҫҡа, шишмәгә төшә, йәки ергә һеңеп тағы ла шул шишмәгә эләгә. Ярай әле хәҙер унда иген генә тултыралар.

Ә шишмә сылтыр-сылтыр ағыуын дауам итә. Нимә тураһында йырлай икән ул? Үҙенең һәм ауыл халҡының башынан үткән ҡайғы-хәсрәттәр, шатлыҡ-ҡыуаныстар хаҡында һөйләйме икән? Барлыҡ йөрәк серҙәрен алыҫтарға ағыҙып алып китәйем тиме икән?..



Ер йөҙөндә гүзәллекте күрә һәм һоҡлана белергә кәрәк, шәфҡәтлелек бөтмәһен, аяуһыҙлыҡ булмаһын, элекке хаталар яңынан ҡабатланмаһын ине, тигән кеүек һаман урғып аға ла аға саф шишмә.

1998 йыл.

## Минең фәрештәләрем

«Ғәҙәттә, һәләтһеҙ кешеләр генә ялағайлана, ә һәләтлеләр дөрөҫөн, тураһын ярып әйтә һәм шул арҡала бәләгә лә тарыйҙар. Беҙ уларҙы аңлап, түҙемлек күрһәтеп, ҡурсаларға, яҡларға тейешбеҙ», – тигәйне Башҡортостандың халыҡ артисы Әхтәм Абушахманов телевидениенан үҙенең бер сығышында. Эйе, ысынлап та, элек-электән һәләтһеҙәр һәләтлеләрҙе иҙгән, уларҙан көнләшкән, күн күрһәтмәгән, нисек тә булһа аяҡ салырға, хатта юҡ итергә тырышҡан. Һәләтлене, үҙенән өҫтөн, юғары икәнен тойоу һәләтһеҙгә тынғылыҡ бирмәй, төн йоҡоларынан ҡалдыра. Ул үҙен өҫтөнөрәк күрһәтеү өсөн, төрлө юлдар, алымдар ҡуллана. Һәләтлене бигерәк тә һәләтһеҙ түрә яратмай, уға һәләтлене юҡҡа сығарыу бер ни тормай. Миҫал артынан йыраҡ йөрөргә түгел, үҙебеҙҙең мәшһүр шағирҙарыбыҙ Аҡмулла, Рәми Ғарипов һ.б. бик күптәр шундайҙар арҡаһында донъянан иртә китте һәм китә. Ә ябайыраҡтар тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Хәйер, ябай шағир булмай, тиҙәр. Улар барыһы ла бөйөк, сөнки тәбиғәт уларға тиңдәшһеҙ сихри, тылсымлы һәләт биргән. Һәләт – Хоҙай Тәғәләнең бүләге; кемгәлер оҡшамағаны, уның талантын аңлай алмағаны өсөн генә шағирҙы

бер кемдең дә мысҡыл итергә хаҡы юҡ. Шағирҙы эргәһендәге иң яҡын кешеләре лә аңламауы мөмкин. Яратҡан кумирҙарым Сергей Есенин, Марина Цветаева шундай фажиғәле яҙмышлы булғандар. Был шиғырҙарым – ошо һәм башҡа фәлсәфәүи темаларға арналған минең һуңғы йылдарҙа тыуған, күңел әрнеүе һарҡылған яҙмаларым.

Мин шиғырҙарҙы бәләкәйҙән яҙа башланым. Үҙем иҫ белгәндән үк. Башланғыс кластарҙа уҡый-яҙа белергә өйрәнгәс, ябай дәфтәрҙе уртаға ҡырҡып, шуға үҙемдең тәүге «әҫәрҙәремде» теркәп, үҙенә күрә бер шиғри йыйынтыҡ яһап алғаным хәтерҙә. Иң тәүге шиғырҙарымдан «Кәзә баҡсаға керҙе» тигән юлдар иҫтә. Ә инде республика баҫмаһында донъя күргән иң беренсе шиғырым етди темаға арналғайны. («Һәйкәл янында» шиғыры, «Пионер» журналы, 1970 й.) Ул баҫылып сыҡҡас, иптәштәрем «Шағирә» тигән ҡушамат тағып, минән көләп йөрөгәйнеләр (6-сы синыфта уҡый инем). Өҫтәүенә, «Очкарик» тигән ҡушаматым да бар ине, уныһы инде мәктәптә, берҙән-бер күҙлекле уҡыусы булған өсөн тағылды (ауыл китапханаһындағы бөтә китаптарҙы уҡып бөтөү ғиллаһе лә ярҙам иткәндер). Шул арҡала миндә «комплекс» барлыҡҡа килде булһа кәрәк, мин бер килке шиғыр яҙыуымды ташлап торҙом. Ә «Һәйкәл янында» шиғырын 9 Май көнөндәге тантаналы балалар яттан һөйләй торғайны.

Әммә, күп тә үтмәй, ижадҡа дәртем яңынан ҡабынды. Быны сәбәбе – тәүге мөхәббәт. Үҫмер ҡыҙҙың һөйөү хистәре ташып, урғылып, илһамға юл асты. Был осорҙағы шиғырҙарымдың бик



аҙҙары ғына һаҡланып ҡалған. Әммә, улар – ижадымдағы иң яҡшы лирик әҫәрҙәр, тип әйтеп була, сөнки хәҙер, олоғайғас, улай итеп яҙып булмай. Ихласлыҡ, тәбиғилек, сафлыҡ бөркөлә уларҙан (Юҡҡа ғынамы ни Тамара Ғәниева «Ағиҙел» журналында нәҡ ошо шиғырҙарымды һайлап алып баҫтырған). Мин инде ул ваҡытта ҡуйын дәфтәре һатып алып, яҙмаларымды шунда теркәй башлағайным, эргәләренә темаһына тура килгән һүрәттәр ҙә йәбештерә торғайным, биҙәктәр ҙә төшөрә инем (Әйткәндәй, мин рәсем яһарға ла оҫта булдым).

Йырларға ла ярата торғайным, моңло итеп... Бигерәк тә Фәриҙә Ҡудашеваға оҡшатырға тырыша инем. Бер ваҡыт өйҙә яңғыҙым ҡалып, уның бер йырын ҡысҡырып йырлағанымды атайым тыңлап торған да: «Ҡыҙым, һин Фәриҙә Ҡудашеванан да уҙҙырып ебәрәһең түгелме һуң?» – тине, йылмайып, арҡамдан тупылдатып һөйҙө. Хәҙер уйлайым да, мөмкинлек тейһә, рәссам да, йырсы ла була ала инем бит (әйткәндәй, әле лә шиғырҙарҙы йырлай-йырлай сығарам). Ләкин мин бик оялсан булдым. Йыуаш, үҙ-үҙемә бикләнгән бала инем.

Үҙемдең сәйер икәнлегемде һиҙә инем, башҡалар ҙа шулай тип әйтә торғайны. Хатта күп йылдар үткәс тә, мине аптыратҡан бер шиғырым бар ине. «Мин тауҙарҙан төштөм» тип атала. Үҙем шул шиғырҙы сығарҙым, ә үҙем ғәжәпләнәм: «Нишә улай тип яҙҙым икән, мин бит үҙ ғүмеремдә бейек тауҙар күргәнем юҡ». Ә хәҙер уйлайым: «Бәлки, үткән ғүмеремдә тауҙарҙа йәшәгәнмендер». Ғәжәп инде был шағирлыҡ... Шунан тағы төшөмдә гел

рәхәтләнеп күктә осоп йөрөй торғайным. Түбәндә кешеләр аптырап ҡарап торалар. Сәйер төш… Бер тапҡыр ғына күрмәнем бит мин уны. Әллә теге донъяла ҡош булдыммы икән? Әле лә күк, йыһан, Ер, Ҡояш, Ай, йондоҙҙар тураһында шиғырҙар яҙырға яратам, шуларҙы күҙәтергә әүәҫмен. Былай ғына ҡарап тормайым, ә ниндәйҙер фәлсәфәүи уйҙар менән бағам.

Тағын бер нәмәне һиҙәм: минең эргәмдә һәр ваҡыт фәрештәләр бар. Эйе, эйе, ап-аҡ үтә күренмәле кейемдәге фәрештәләр – минең һаҡлаусыларым, яҡлаусыларым. Улар, ҡанаттарын елпеп, гел минең тирә-яғымда уралалар. Ҡайһы ваҡыт тыйнаҡ итеп кенә йылмая ла, ҡайһы саҡ сыр-сыу килеп тә китәләр, ә шиғыр яҙғанда тынып ҡалалар ҙа яурындарым аша етди йөҙ менән ҡарап торалар. Бик күп ауыр ваҡыттарымда ярҙам иттеләр миңә, әле лә ҡурсалайҙар. Рәхмәт фәрештәләремә.

## Ҡояшҡа юл

Оҙаҡ итеп, күҙемде лә алмай, ҡояшҡа ҡарап торғайным. Шул утлы шар менән минең арала бер юл һуҙылды. Земберләп торған һуҡмаҡ нурҙарҙан туҡылған торбаны хәтерләтә. Ниндәйҙер мөғжизә менән хасил булған юлдан минең йөрәгемә йылы нурҙар ағыла башланы. Мин үҙем дә һиҙмәстән йылмая инем. Шул һуҡмаҡ буйлап ҡояшҡа табан йүгереп китерҙәй булдым. Күңелгә нисектер рәхәт ине. Был донъялағы барлыҡ хәсрәттәрем, ҡурҡыуҙарым, әрнеүҙәрем юҡҡа сыҡты. Их, гелән шулай ғына булып торһа икән! Башҡа кешеләрҙең



йөрәге менән минең йөрәк араһында ла шундай күпер һалынһын ине ул… Бының өсөн ҡояшҡа күберәк ҡарарғалыр, бәлки. Унан йылы алып, башҡаларға өләшергә. Бәлки, шул саҡта мин үҙ-үҙемдән риза булыр инем; бәлки, шул саҡта йәнемә тыныслыҡ килер, күңелемдә гармония урынлашыр, унда бер ҡасан да иблис инеп ояламаҫ, ә бит ул бер керһә, уны сығарыуы, ай-һай ауыр, бик ауыр… Шайтан ҡоторотоуҙарына ҡаршы көрәшә-көрәшә, йөрәктең хәле бөттө бит инде. Ҡояшым, ҡотҡар мине! Һиндә генә бөтә өмөт. Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт, ҡояш бүләк иткәне өсөн. Ул, Юғары көс, үҙе лә нурҙан бит, зәңгәр нурҙан. Ҡалай рәхәт, тирә-йүнең нурға күмелһә! Ошо халәттән айырмаһын ине Хоҙайым. Лә илаһи иллалла, Мөхәммәт – рәсүлулла. Быны миңә әсәйем өйрәткәйне бәләкәй саҡта. Әсәйем дә ҡояш ине – исеме есеменә тап килде: Шәмсеҡәмәр. Йәне йәннәттә булһын мәрхүмәнең. Ҡара әле, мин ҡояш тураһында яҙа башлағайным, әсәй хаҡында фәлсәфәгә төшөп киткәнемсе. Был тәбиғи: ҡояш кеүек, әсәй ҙә йылыта, әсәй ҙә бер генә була бит. Ә миңә уның янына юл бармы икән?

## Просто поэтесса

Ты права, я – просто поэтесса.
Что тут поделаешь,
Не шеф, не рвусь на части,
К богатству не имею интереса,
Поэзия – вот счастье!

Возможно, колесо моей фортуны
Катится по земле, ломая спицы,
Но не зачахла, не пропала втуне
Душа моя – взлетающая птица.

И голову по-рабски не склоняю,
В благое верую,мне чужд запретный плод.
На крыльях вдохновения взлетаю
Туда , где так свободен неба свод!

Писать стихи! – другого не желаю,
И поэтому судьбы подарку рада.
И знаю, когда крылья расправляю:
Быть просто поэтессой – вот награда!

## Памятник

Выдавливать стих со скрипом
Из сердца , со слезой –
Аллах, прости!
Писать изжеванные мудрости
Нет времени и сил.



Жизнь наступила – нынче, ведь, с руки:
Тычки, толчки и непрерывный бег.
Бег за деньгою наперегонки:
Или догнать, или лицом в грязь, снег…

Остановись, минутку, на бегу
И призадумайся… Авось Аллах поможет.
За призраком гонясь, на беду,
И в дураках остаться можешь.

Богатства ведь туда не заберешь –
Гримасы жизни и ее, Фортуны,
Богатство обретешь, не обретешь –
Уж лучше о душе подумай!

Наверно, хватит и клочка земли
Под холмиком могильным возлежать.
Зачем же жизнь короткую, внемли,
И душу свою черту задолжать?

Какой же памятник себе ты воздвигал:
(Мол, памятью пребудет мне вовек…)
Построил дом, ребенка воспитал,
Иль дерево взрастил ты, человек?

Мне памятник – моих стихов строка,
Три дочери послушных – это знаю.
Тянусь я к совершенству… А пока
По капле крови из сердца выжимаю.

## Однажды…

Природы очень странная игра:
Снег падал на зеленые листки.

Им дела нет: пришла зимы пора –
Они юны, от смерти далеки.

И даже осень странной приключилась:
Листки на ветках не желтели долго…
И вдруг, однажды, золотом покрылись
Деревья за окошком волглым.

Природе удивляюсь вновь и вновь
(В который раз преклоняюсь перед нею):
Средь желто-красного и бурого цветов
Цвет жизненный упорно зеленеет.

Листки в предзимье желтыми не стали,
Еще живые и зеленые пропали:
Однажды, вдруг, оборвались, опали –
Под снег холодный мертвые упали.

## Бегство

Жизнь идет, жизнь клокочет, кипит – суетлива.
Но все это вдали и совсем без меня.
Гложет бремя обид горьких, несправедливых…
И слепа, и глуха я: душа без огня.

Головою в песок, словно страус, зарылась.
Безразлична к тому, что сейчас: день иль ночь…
Сердце – камень, живого в нем нет – испарилось,
И душа на замок преогромный закрылась,
Да и ключ от него мною выброшен прочь.

Дал душу – даст пищу нам Аллах.
Хоть душа чуть жива – нет меня, умерла.
Но нельзя же, нельзя… Надоело так жить!
Пусть пробьет чей-то лук, чтоб стрелой оживить.



## Омовение

О, если бы представить на мгновение:
Я, Водолей, свершила миру омовение,
И в этом мире чистом, безгреховном
Жизнь началась насыщенной духовно.

Не в небе, Человек, твой райский сад,
Не преврати его в кромешный ад.
Тебе ведь жить на этом белом свете,
Оставь его цветущим своим детям.

Ты – плод любви и на Земле живущий,
Земным не нужно клонов в мире сущем.
Любовь в высоких чувствах так богата,
Что не предпочитает суррогатов.

Грядущее темно, коль дух погаснет;
Коль светел лик души, то день твой ясен.
Раздай лучи души, как солнце летнее,
Живи, о Человек, тысячелетьями!

## Народ сам знает

Народ сам знает – есть всему цена:
Где хитрость и позор, где белизна.
И пусть по сорок дважды лет пройдет,
След черных дел народ всегда найдет.

Чиновники кичатся властью, силой,
Их время злое, проходя, не уходило.
Цветами осыпаем их могилы –
Народ все знал, молчал… И это было.

Нахальные, без совести, без веры,
Измученные жадностью без меры,
Своей вины перед людьми не признавая,
Того, что в пекло попадут, не понимают.

Лишь деньгам молятся, не узнают в упор
И родича, коль беден и не вор.
А издали: ну ангелы, хоть в святцы!
На деле: женщины, готовые продаться.

Народ сам чувствует, он видит, знает,
Пусть запоздало, но оценит и признает:
Чьи жизни бесполезно пролетели,
А чьи служили благородной цели.

***

Легко тебе, святая ты душа,
А что же остальным нам делать?
Устала я препоны разрушать,
Что ставит между нами демон.

Тебе я благодарна и за то,
Что сердце вдруг не обратилось в камень,
Что, как веточки оторванный листок,
В грязь не затоптана ногами.

Принадлежит, увы, весь белый свет
Завистникам, льстецам закоренелым.
Устала я: душе покоя нет,
Как одиноко ей на этом свете белом…

Легко тебе, святая ты душа!
А мне, скажи, что остается делать?



Ведь общность судеб не дает дышать,
Петлей аркана стягивая тело.

А сердце заморочено пока,
Тобой ему не вечно тяготиться,
Когда душа уйдет за облака,
Я от всего смогу освободиться.

## Закат

Любить закаты, грустные до боли,
Недавно пристрастилась я, к несчастью:
От розовой зари за дальним полем
Душа моя расколота на части.

Глаза кричат,
Растерянно моргают:
Ведь было солнце, было, несомненно!..
Последний луч за горизонтом тает,
Как будто бы прощаясь с миром бренным.

Жизнь человека Солнцу – миг короткий:
Рассвет, закат, и все это приснилось.
Кому-то солнце улыбалось кротко,
А для кого-то в облаках укрылось.

Все преходяще, все проходит: страсти,
И молодость, и первая любовь…
Но все-таки жизнь на Земле не гаснет,
Как солнышко, восходит вновь и вновь.

## Творчество

С одиночеством наедине,
Одинокой себя не считаю.
И судьбу, что дарована мне,
Никому отдавать не желаю.

Ангел мой, что следит за судьбой,
Навевает стихов новых строчки.
И торопит, зовет за собой,
И бежит карандаш по листочку.

Цель моя: безо всяких затей
В море творчества плыть до финала.
А других мне не надо путей,
Я другие пути оборвала.

Мне наперсницы – звезды горят,
Шлют лучи – подарок Вселенной.
И прошу их, благодаря,
Только веры прошу смиренно,
Только дара – писать не зря.

## Апокалипсис

Земля от взрывов стонет, голосит:
Народ забыл сей мудрости господней,
Что колесо, слетевшее с оси,
Докатится до самой преисподней.

И снова на нашей планете войны,
И снова взрывов ядерный Содом…
Мы – дьяволы, рабы и не достойны
Того, что шар земной – наш общий дом ?!



Златая колыбель – Земля – в кручине:
«О святой ты век, век Водолея!
Ну, неужели вывелись мужчины,
Чтобы беречь меня, лелеять?!»

И если снова к вере не придут
Наследники библейского Адама,
То взрывы нашу Землю разнесут,
Как одуванчик… И не станет Дома.

В глубинах Космоса жемчужиной одной
Пока что суждено Земле скитаться.
Так сбережем,
Как очи, шар Земной,
Чтоб "homo sapiens" считаться.

## Мой сад

Домой из дальних странствий воротилась,
Где ждет меня осиротевший сад:
Замерзли яблони и вишня обломилась ,
И ягоды малины выбыл град.

Но поправимо все: ведь не засохли
Моей души мятущейся цветы.
Их корни еще живы, не заглохли,
Как и соратники – мелодии мечты.

Мое богатство – сад души, и знаю,
Что сорнякам его не полонить.
Его я благодарно поливаю,
Как-будто продлеваю жизни нить.

## Вечность

Мне имя Вечность* дал отец покойный,
Вложив в него мечту свою о том,
Что будет жизнь моя безбрежной и достойной,
Цепочкой вечной, что струится серебром.

А я – звено ее, и потому я вечна.
Пусть жизнь моя для вечности – момент,
Но я звено в цепочке жизни бесконечной:
Есть дети, внуки – мой главнейший аргумент.

Мне скажут: жизнь – сумятица, сомненья,
И лишь в земле найдем покой конечный…
Но не порвать моей цепочки звенья,
Ведь жизнь прекрасна, потому что вечна!

**Перевод В. Уразбаева.**



* Халида в переводе с арабского – «вечность».



## Йөкмәткеһе

Автор тураһында 5
**I. Шиғырҙар** 7
1. Ғәсел 7
2. Шәфәҡ 8
3. Баҡсам 8
4. Ерем байлығы 9
5. Үҙе белә халыҡ 10
6. Һиңә еңел: һин – иҙге йән 11
7. Һәйкәл 12
8. Ябай шағирә 13
9. Яралы ҡош 13
10. Ташландыҡ эт 14
11. Ә бер көндә… 15
12. Сәңгелдәк 16
13. Алмағастар сәскә ҡоялар 16
14. Ынйы сәскә 17
15. Тирәктәр мамыҡ осора 18
16. Ҡара болот – аҡ болот 18
17. Йондоҙҙар 19
18. О Богема! 20
19. Ҡояшҡа юл 20
20. Ҡарлуғаскай – ирекле ҡош 21
21. Яҙғы йыуаныу 22
22. Үкенестәр 22
23. Һинд йырҙары 23
24. Һәйкәл янында 23
25. Ҡарағайҙар 24
26. Әсә ораны 25
27. Чечня бәйете 26
28. Килер көн 27
29. Ахрызаман 28
30. Ашҡаҙарҡай буйы 29

31. Кисәтеү 30
32. Талмәрйен 31
33. Түрә 32
34. Күгәрсен менән сәпсек 32
35. Дүрт юллыҡтар 33
36. Ҡышҡы ял 34
37. Ил ағаһы 34
38. Яңы Йыл теләктәре 35
39. Көмөш еп 37
40. Һылыуҡайға 39
41. Шым-шым булып ҡалды ихтә 42
42. Кеше һәм тәбиғәт 42
43. Мин – мәңгелек 43
44. Әсәйемә 44
45. Атайыма 44
46. Ҡоштар байрамы 45
47. Үпкәләмә 46
48. Аманатым 47
49. Ҡыҙыма 48
50. Әсә теләктәре 49
51. Еңгәнем 49
52. Һылыуыма 50
53. Килеп еткән ғүмер урталарың... 51
54. Тыуған йорт 52
55. Һағыш 52
56. Айтәләмә 53
57. Ләйсәнем 54
58. Ҡояшлы ямғыр 54
59. Көйөргәҙе буйы 56
60. Күмертауым 56
61. Ҡайтып төштөм 57
62. Таңкойом 58
63. Таң 58
64. Ҡышҡы этюд 59



65. Юлда 60
66. Ижад 60
67. Шиғырҙарым 61
68. Йылы күҙ 62
69. Кәрәкмәй 62
70. Йөрәктә наҙ сәскә ата 63
71. Мүйилдарҙы һындырмағыҙ 64
72. Яҙмыш диңгеҙендә 65
73. Өмөттәр 66
74. Ҡуласа 66
75. Яҙҙар етә... 67
76. Минең доғыям 68
77. Эй ямғырым!.. 68
78. Тоҙйылғаҡай 69
79. Юшатыр 70
80. Әллә нишә һуңлап килде яҙҙар... 71
81. Төш 71
82. Барыбер бәхетле булам мин 72
83. Умырзаям – минең йәшлегем 73
84. Гәзеллек 74
85. Тәбиғәткә 75
86. Май кисе 75
87. Тәүбә 76
88. Тыуған көн 84
89. Еләк 84
90. Күмертау таҡмаҡтары 85
91. Мөхәббәт – сир, тиҙәр... 86
92. Сирень ҡыуағы 86
93. Күгәрсен 87
94. Матур үтә көндәрем 88
95. Күгәрсен күҙҙәре 88
96. Туҡмаҡҡаран 89
97. Буйым етмәҫ йондоҙ төҫлө инең 91
98. Яратам 91

99. Хат 92
100. Аңырылмышыу 93
101. Ете ҡыл сатында 93
102. Йондоҙға ла буйым етер кеүек 94
103. Хистәрем 94
104. Йәй аҙағы 95
105. Ғүмеремдә тағы яҙ 96
106. Теҙләнәмен Һинең алдарыңда 97
107. Сират күпере 97
108. Ай тулғанда 98
109. Һине көттөм 99
110. Ырашҡы 99
111. Күрәсәк 100
112. Ҡарҙар яуа 100
113. Килеп керҙең миңә ҡара көҙҙә… 101
114. Иман менән ҡайын 102
115. Һағыныу 102
116. Бүләк 103
117. Сағын 103
118. Һин көслә, ә мин хисле… 104
119. Мөхәббәт 111
120. Ышаныс 106
121. Изгелек һәм яуызлыҡ 106
122. Һуңғы һынау 107
123. Көҙгө уйҙар 107
124. Ҡайындар 108
125. Йөрәгем әле лә әсенә 109
126. Бәхетем 110
127. Ҡасыу 111
128. Ҡушбүләгем 111
129. Һин китәһең 112
130. Һин дә мин 112
131. Һуңғы сәскәләр 113
132. Һөйөү усағы 114





133. Икәүләшеп балан тирәбеҙ 114
134. Яуын 115
135. Алтын ҡайын 116
136. Хыялым 116
137. Саф тамсылар 117
138. Ҡайтайыҡсы, әйҙә, ауылға 117
139. Ҡышҡы урман 118
140. Васыят 119
141. Ҡарт алаша 119
142. Тере шишмәләр 120
143. Аҡ ҡыш әле… 121
144. Рәшүәтсе ханыма бер кәлимә
бағышлау һүҙе… 122

**II. Поэма** **123**

Ҡояш менән ай 123

**III. Эсселар** **137**

1. Урғыл шишмәм 137
2. Минең фәрештәләрем 141
3. Ҡояшҡа юл 144

**IV. Стихи, переведенные на русский язык.**

**Перевод В. Уразбаева** **146**

1. Просто поэтесса 146
2. Памятник 146
3. Однажды… 148
4. Бегство 148
5. Омовение 149
6. Народ сам знает 149
7. Легко тебе, святая ты душа… 150
8. Закат 151
9. Творчество 152
10. Апокалипсис 152
11. Мой сад 153
12. Вечность 154

**Йөкмәткеһе** **155**

*Литературно-художественное издание*

ХАЛИДИӘ МИҺРАНИ

**ЫНЙЫ СӘСКӘ**
**(ЛАНДЫШ)**

*на башкирском и русском языках*

Ответственный за выпуск Х. З. Алтынбаева.

Компьютерная верстка и оформление М. С. Гафарова.

*Сдано в набор 10.01.12 г.* *Подписано в печать 20.04.12 г.*
*Формат* 60×90 1/16 *Печать офсетная.*
*Усл. п. л.* – 1,52 *Заказ №* 15
*Тираж* 100 экз.
*Гарнитура:* Times Cyr Bash Normal, Palatino Linotype,
Times New Roman

*Отпечатано в ГУП РБ Кумертауская городская типография*

*Республика Башкортостан, г. Кумертау, ул. Гафури, 26*

